ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 сентябрь (нарысай)

2016

№36 (714)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Һин нимә менән генә шөғөлләнһәң дә, ҡыйыулыҡ кәрәк. Сөнки һин нимә генә эшләмә, алға барыу өсөн ниндәй генә юлды һайлама, "Һин яңылышаһың", тип әйтә торған кеше барыбер осраясаҡ. Ауырлыҡтар булып тора, шуға ла һайлаған юлыңды тәнҡитләүсе менән тиҙ генә килешеүең дә бар. Үҙ маҡсатыңды булдырып, уға табан ныҡышмалы барыу өсөн дә ҡыйыулыҡ талап ителә. Донъяла күп еңеүҙәргә урын бар, һәм ул еңеүҙәр һинең ҡыйыу эш итеүеңдә көтә.*

**Ральф Эмерсон.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәштәр ҡоролтайы ойоштороу...**
күптән көтөлгән ваҡиға



7

**Мин Польшала ла, Өфөлә лә йәшәйем...**
мин бөтөн ерҙә лә йәшәйем.



8-9

**Тормошоңа килеп кергән һәр кеше - бүләк**



11

**Сәмле лә, ғәмле лә бит улар!**



12

**Һайлауҙар** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һайлау алды көндәрендә депутатлыҡҡа кандидаттар үҙ программаларында тағы ла Рәсәйҙең милли идеяһы тураһында һүҙ ҡуҙғата. Ә шулай ҙа нимә һуң ул Рәсәй өсөн, Башҡортостан өсөн милли идея?



***Хәләф ИШМОРАТОВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:*** Милли идея - ул иң беренсе илһөйәрлек, ата-бабаларыбыҙ йөҙәр, меңәр йылдар буйы йәшәтеп килеп, беҙгә аманат итеп ҡалдырған ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, традицияларҙы һаҡлау. Тап улар милләтте һаҡлаған, милләтте - милләт, халыҡты халыҡ иткән. Беҙ ҙә шул аманатҡа тоғро ҡалһаҡ, глобалләшеү шарттарында юғалып ҡалмаясаҡбыҙ һәм Көнбайыштан килгән ялған ҡиммәттәр өҫтөнлөк алмаясаҡ.

Был әйтелгәндәр башҡорт халҡына ғына түгел, ә Рәсәйҙә йәшәгән һәр милләткә ҡағыла, сөнки илебеҙ үҙенең күп милләтлелеге һәм федерализм нигеҙендә берләшеүе менән генә дәүләт була алған ил. Ә башҡа милли идеяны мин күҙ алдына ла килтерә алмайым. Артҡа боролоп күҙ һалһаҡ, Рәсәйҙең яңы тарихында, уҙған быуаттың 90-сы йылдары башынан алып сәйәсмәндәр төрлөсә ҡаңғыра, милли идея эҙләй.

**Ә бына Рәсәй Президенты Владимир Путин ошо йүнәлештә ике ҙур һәм әһәмиәтле аҙым эшләне, тип уйлайым: беренсеһе - йәштәрҙә илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләү мәсьәләһен күтәреп сыҡты, икенсеһе - Рәсәйҙе Рәсәй иткән, дәүләт иткән, Конституцияла Рәсәй Федерацияһы тип аталған илдең барлығын күҙ уңында тотҡан, федерализм нигеҙенә иң беренсе ташты һалған башҡорттарҙың дәүләтселеген танып, өҫкә күтәреп, Башҡортостан Республикаһының ойошторолоуына 100 йыл тулыуҙы билдәләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.**

Бында тағы шуны билдәләп китер инем - Зәки Вәлиди үҙенең васыятында, теләктәрендә өс төшөнсәгә иғтибар итеүҙе үтенә: беренсеһе - ер, икенсеһе - тел, өсөнсөһө - дин. Уларҙың әһәмиәте йылдар үткән һайын ҙурайғандан-ҙурая, мәғәнәһе киңәйгәндән-киңәйә бара һәм бөгөн дә башҡорт халҡы өсөн актуаль булып тора. Әгәр үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булып ҡалһаҡ, телебеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе онотмаһаҡ, ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған традицион Ислам динен дөрөҫ итеп алып барһаҡ, милләтебеҙ йәшәйәсәк. Бына ошо өс төшөнсәнең әһәмиәтен күҙ уңында тотоп, IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының докладында һәм ҡарарҙарында уларға етди иғтибар биреү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алдыҡ. Шул йыйында ҡабул ителгән документтарҙа теркәлгәндәрҙе тормошҡа ашырһаҡ, Рәсәйҙә йәшәгән 200-гә яҡын милләт араһында үҙенсәлегебеҙҙе юғалтмаясаҡбыҙ, һәм, Мостай Кәрим әйтмешләй, тарих арбаһында үҙ йырыбыҙҙы йырлап барасаҡбыҙ. Бына ошолар ул милли идея. Ҡабаттан велосипед уйлап сығарырға, яңы милли идея эҙләргә кәрәкмәй ҙә.

***Нурислам ҠАЛМАНТАЕВ, тарих фәндәре кандидаты:*** Рәсәй сәйәсмәндәренең күпселеге, әлбиттә, милли идея тураһында һөйләгәндә бөйөк, ҡеүәтле, бүленмәҫ Рәсәй тураһында фекер йөрөтә. Эйе, беҙ ҙә шундай Рәсәй яҡлы, әммә ул үҙ халҡын яҡлаған - үҙ халҡы менән һуғышмаған, уны һаҡлаған, халыҡ һанын арттырыу менән генә түгел, уның сифаты тураһында ла хәстәрләгән бөйөк, бай, прогрессив ҡарашлы держава булырға тейеш.

**(Дауамы 2-се биттә).**

“КИСКЕ ӨФӨ”НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# ТӘРБИӘ ЭШЕНДӘ...

**басманың ярҙамы ҙур**

**"Киске Өфө" гәзитен тәүге тапҡыр алып уҡығас уҡ ул үҙенең халыҡсанлығы менән күңелде арбаны. Был баҫмала һәр башҡортҡа яҡын темалар яҡтыртыла, һәр кемде борсоған һорауҙарға яуаптар табырға мөмкин. Бигерәк тә рухи тәрбиә, әҙәп-әхлаҡ, үҙ йолаларыбыҙ һәм тарихыбыҙға ҡағылышлы мәҡәләләр фәһемле.**

**(Дауамы 2-се биттә).**



*Хәйбулла егеттәре лә уҡый гәзитебеҙҙе.*

12+

“КИСКЕ ӨФӨ”НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# ТӘРБИӘ ЭШЕНДӘ...

## баҫманың ярҙамы ҙур

(Башы 1-се биттә).

Мине бигерәк тә "Киске Өфө" гәзитендә донъя күргән мәғариф өлкәһендәге көнүҙәк проблемаларҙы яҡтыртҡан мәҡәләләр ҡыҙыҡһындыра. Гәзиттең һәр һанында баш ҡаланың белем усаҡтары тураһында мәғлүмәттәр, уҡыусылар һәм педагогтар ҡатнашлығында матур саралар, милли мәғарифҡа ҡағылышлы хәл ителәһе мәсьәләләр буйынса материалдар баҫыла. Уларҙа ябай уҡытыусы, уҡыусы, Мәғариф министрлығы белгестәренең фекерҙәре урын ала - проблема төрлө яҡлап тикшерелә, хәл итеү юлдары барлана. Уҡытыусы булараҡ, үҙемә бик күп фәһемле мәғлүмәтте гәзит биттәренән алам, шул уҡ Берҙәм дәүләт имтиханы, баш ҡала белем усаҡтарының торошо, коллегаларымды борсоған һорауҙар, башҡорт телен уҡытыу буйынса фекерҙәр, уҡыусы тәрбиәһенә кәрәкле аҡыллы кәңәштәр һәр һанда бар.

Әйтергә кәрәк, "Киске Өфө" гәзитенә йыл да синыф менән яҙылабыҙ. Уҡыусылар гәзиттең "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһын яратып уҡый, инша яҙғанда йыш ҡына эпиграф итеп шунда баҫылған мәҡәлдәрҙе, аҡыл эйәләренең әйткән һүҙҙәрен ҡулланалар. Рубрикала баҫылған риүәйәт, хикмәтле һүҙҙәр, һис шикһеҙ, бала хәтерендә уйылып ҡала.

Тәрбиә эшендә гәзиттең ярҙамы ҙур. "Киске Өфө" гәзитендә төрлө һөнәр эйәләре, үҙ эшендә уңыш ҡаҙанған йәш белгестәр, алдынғы ҡарашлы йәштәр, өлгөлө ғаиләләр тураһындағы мәҡәләләрҙе лә ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Ул ғына ла түгел, синыф сәғәттәре үткәргәндә, балалар менән тәрбиәүи темаларға фекер алышҡанда бына ошо гәзиттә “Заман башҡорто” рубрикаһында сыҡҡан интервьюлар буйынса үҙебеҙҙең уңышлы башҡорт йәштәрен миҫалға килтереп, өлгө итеп күрһәтеп һөйләйем. Сөнки һәр фекерҙе аныҡ миҫалдар менән дәлилләп, бына беҙҙең башҡорттар араһында ла ошондай арҙаҡлы шәхестәр бар, тип, уларҙың уңыш ҡаҙаныу серҙәре тураһында һөйләү бала күңеленә ныҡ тәьҫир яһай. Кемдәрҙер фәһем ала, кемдер тап шул шәхес кеүек булырға хыяллана башлай.

Бына шулай, "Киске Өфө" гәзите төрлө яҡлы һәм педагогтар өсөн бик кәрәкле баҫма. Илем, телем, халҡым тип янған һәр кемдең күңел талабын ҡәнәғәтләндерерлек, рухын нығытырлыҡ гәзит ул. Ғәмле, сәмле, аҡыллы һәм фекерле йәштәр тәрбиәләргә теләгән уҡытыусыларға уны өҫтәл янында ғына тотоп уҡырлыҡ.

**Гөлсинә ИЛЬЯСОВА,**
**Өфө ҡалаһының 48-се Башҡорт мәктәбе уҡытыусыһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һайлау алды көндәрендә депутатлыҡҡа кандидаттар үҙ программаларында тағы ла Рәсәйҙең милли идеяһы тураһында һүҙ ҡуҙғата. Ә шулай ҙа нимә һуң ул Рәсәй өсөн, Башҡортостан өсөн милли идея?

(Башы 1-се биттә).

Башҡортостан да, башҡорттар ҙа Рәсәй өсөн, әммә демократик, федератив Рәсәй өсөн. Был турала ураған һайын ҡабатлап торабыҙ ҙа инде. Әлеге федератив ҡоролош менән ризабыҙ, тик республика һәм крайҙарҙы эреләтеүгә ҡырҡа ҡаршыбыҙ. Беҙҙең өсөн милли идея - ул һәр халыҡтың теле, мәҙәниәте, тарихы һаҡланып ҡалыуы, әлеге булған закондарҙың тағы ла камиллашыуы һәм кешенең, ҡайҙа ғына йәшәүенә ҡарамаҫтан, Мәскәүҙәме ул, Ырымбурҙамы, Свердловск өлкәһендәме, үҙенең туған телен, мәҙәниәтен, тарихи тамырҙарын өйрәнеүе, бының өсөн тейешле шарттар тыуҙырылыуы.

Милли идеяның икенсе таяуы - эшле булырға тейешбеҙ. Дәүләткә эшләйбеҙме, үҙебеҙҙең эшебеҙҙе асабыҙмы - килем сығанағыбыҙ булһын. Сөнки эш булһа, аҡса ла була, аҡса булһа, артабан үҫеш мөмкинлеге була.

Өсөнсө таяу тип һәр башҡорттоң ғаиләле булырға тейешлеген билдәләр инем. Башҡорт ғаиләһендә кәмендә өс бала булырға һәм был артым сифатлы булырға тейеш. Һан да кәрәк, әммә сифат тураһында ла онотороға ярамай. Сифатлы шәхестәр генә республикабыҙҙы ла, милләтебеҙҙе лә яңы кимәлгә күтәрәсәк.

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, Салауат Юлаев ордены кавалеры:*** Тотош донъя өсөн дә, Рәсәй өсөн дә, Башҡортостан өсөн дә милли идея - ул халыҡты милләт булараҡ һаҡлау һәм шуның юлдарын табыу, минеңсә. Сөнки ер йөҙөндә бик күп төрлө милләттәр йәшәй. Бөтөн донъя халҡы кеүек үк, Рәсәй һәм Башҡортостан халыҡтары, был донъяға тәбиғәт тарафынан милләт итеп бар ителгән икән, шул халыҡты милләт итеп һаҡлау яғында, сөнки һәр халыҡтың үҙенең теле, традициялары, мәҙәниәте, тарихы бар. Ошо нигеҙҙә һәр халыҡ милләт булып йәшәй. Ә милләттәрҙең үҙ-ара аралашыу тел берлеге, хатта белем алыу теленең дә бер үк булыуы ихтимал, ләкин милләтте милләт итеп һаҡлау теле, милләттең аралашыу теле, йолаларҙы һаҡлау - ул һәр халыҡтың үҙенең үҙенсәлеге. Аралашыу теле менән туған телде бер ваҡытта ла бутарға ярамай. Туған тел менән кешенең бөтөн булмышы, ошо донъяла барлығы, һәләте, хатта сәләмәтлеге бәйле. Донъяға айырым милләттәр, уларҙың йолалары һәм, иң мөһиме - йыр-моңо, бар ителгән икән, тимәк, әһәмиәттәре бик ҙур. Бының сәләмәтлеккә йоғонтоһо хаҡында ла онотороға ярамай. Халыҡ араһында киң таралған медитация, йәғни фекерҙе бер йүнәлешкә көйләп, нерв күҙәнәктәренә ыңғай тәьҫир итеп тынысланыу ысулы милләттең йыр-моңо аша килә. Шуның өсөн дә һәр милләттең ҡото булған шәхестәре милләтте туплаусы туған телен, берләштереүсе йолаларын, киләсәккә этәргес биреүсе тарихын ҡурсаларға тырыша.

***Фәнзирә ЗАКИРОВА, пенсионер:*** Милли идея тигәндә, уның атамаһынан уҡ күренеүенсә, ул айырым бер милли төркөмдөң йәки милләттең мәнфәғәтен хәстәрләүсе, уның ихтыяжын асыҡлаусы һәм проблемаларын хәл итеүҙе күҙаллаған, шул уҡ ваҡытта милләтте берләштереүсе бер маҡсат, тип уйлайым.

Рәсәй ҙә, Башҡортостан да күп милләтле булыуы менән айырылып тора, шуға милли идея тураһында һүҙ күтәрелһә, ул гелән милләтселеккә алып барып бәйләнә. Әбит, ғәмәлдә, милләтселектең төп маҡсаты - ошо милли идея нигеҙендә үҙ милләтеңдең, үҙ халҡыңдың үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыу ғына түгел, бөгөнгөһөн, киләсәген хәстәрләү, уның башҡалар араһында тиңлеген танытыу, минеңсә. Уны бары тик төрлө сәйәси ваҡиғалар һәм ағымдар йоғонтоһонда төп мәғәнәһенән айырып, ярлыҡ итеп файҙаланғандар һәм файҙаланалар.

Күп милләтле һәм күп конфессиялы илдә йәшәгәс, тәҡдим ителгән милли идея бер төркөм йәки бер милләттең генә өҫтөнлөгөн тәьмин итергә тейеш түгел, ул бар халыҡтың да мәнфәғәтен күҙ уңында тоторға бурыслы. Ләкин милли республикалар һәм крайҙар, үҙҙәренең территорияларында йәшәүе, үҙенең тарихы, теле, дине нигеҙендә саманан ашмайынса, үҙҙәренең милли идеяһын тормошҡа ашырырға ла хаҡлылыр, моғайын. Мәҫәлән, Рәсәй составында йәшәгәнлектән, барлыҡ милләт һәм халыҡ вәкилдәре лә бер-береһенә дуҫ, татыу, ихтирамлы мөнәсәбәттә булырға, шул уҡ ваҡытта үҙҙәренең милләтен һаҡлап ҡалыу буйынса эшмәкәрлек алып барырға кәрәклеген дә онотмаҫҡа тейеш. Рәсәй өсөн дә, Башҡортостан өсөн дә тап килгән милли идеяны мин шулай күҙаллайым.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. Ҡыуаныслы хәбәребеҙ ҙә бар: Рәсәй почтаһы яҙылыу хаҡтарына бер аҙ ташлама яһаны, йәғни хәҙер һеҙ 50665 индекслы гәзитебеҙгә - 485 һум 40 тингә, 50673 индексына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Сентябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән 10 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь", дүрт кеше "Бураҡаевтар ижады", шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 сентябрҙә Башҡортостанда 450 мең уҡыусы өсөн яңы уҡыу йылы башланды, 55 мең самаһы бала тәүге тапҡыр парта артына ултырҙы. Республикала 1362 мәктәп уҡыусылар өсөн үҙ ишектәрен асты. Тантаналы линейкаларҙан һуң "Минең буласаҡ һөнәрем" һәм "Тормош хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре" темаһына асыҡ дәрестәр үткәрелде. Һуңынан һәр уҡыу йорто Белем көнөнә арналған байрам саралары ойошторҙо. Башҡортостандың мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова уҡыусыларға, уларҙың ата-әсәләренә һәм уҡытыусыларға ҡотлау менән мөрәжәғәт итте.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов эш сәфәре барышында Фёдоровка районында булды. Белем көнө алдынан Фёдоровка ауылында 1-се урта мәктәпте асыу тантанаһы үтте. Объект туғыҙ ай эсендә төҙөлдө. Быға тиклем белем биреү учреждениеһы иҫке генә бинала урынлашҡайны. Эш сәфәрҙәренең береһендә Рөстәм Хәмитов ауылда яңы мәктәп төҙөргә кәрәклеген билдәләне. Хәҙер 375 урынлыҡ 1-се урта мәктәп дөйөм майҙаны 6,7 мең квадрат метрлыҡ заманса өс ҡатлы корпуста урынлашҡан.

✓Башҡортостан юлдаш телеканалында "Власть яуап бирә" тип аталған яңы проект башланды. Студия ҡунаҡтары - республика министрҙары һәм ведомство етәкселәре. "Власть яуап бирә" тапшырыуында тәүгеләрҙән булып Башҡортостандың хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова ҡатнашты. Тапшырыу Башҡортостан юлдаш телеканалында һәр кесаҙна киске сәғәт 10-да тура эфирҙа бара.

✓Башҡортостанда дөйөм күләме 267 миллиард һумлыҡ 319 инвестиция проекты әҙерлек һәм тормошҡа ашырыу стадияһында. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Инвестиция мөхитен яҡшыртыу буйынса йәмәғәт советы ултырышында республиканың иҡтисади үҫеш министры Сергей Новиков хәбәр итте.

✓Ҡорбан байрамы уңайынан 12 сентябрь Башҡортостанда ял көнө тип иғлан ителде. Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, биш көнлөк эш аҙнаһы булғанда республикала 10,11 һәм 12 сентябрь ял көндәре булып тора. Ҡорбан байрамы - хаж тамамланыуын белдергән ислам байрамы. Ул Ураҙа байрамынан һуң 70 көн үткәс, Зөлхизә айының унынсы көнөндә билдәләнә.

✔ *Донъя аренаһындағы бөгөнгө сәйәси тотороҡһоҙлоҡтоң сәбәптәре ахыр сиктә наҙанлыҡ, тәрбиәһеҙлек кеүек төшөнсәләргә барып тоташа. Юғары мәҙәниәтле, белемле һәм кешелекле шәхестәргә ҡытлыҡ һиҙелә түгелме?*



БЫЛ АЙҘА...

# ДОНЪЯ - ЙОҘАҠ, АСҠЫСЫ - БЕЛЕМ

**Быйылғы ғәҙәти булмаған август ҡыҙыуының бер аҙ һүрелеүенә өмөт итеп, сентябргә бағабыҙ, ләкин метеорологтар алдан күҙаллауҙарҙан тыйылып тороуҙы хәйерле күрә һәм беҙҙең иғтибарға сентябрь айының һуңғы 8 йылдағы уртаса күрһәткестәрен тәҡдим итеү менән сикләнә. Был айлыҡ уртаса күрһәткес 19-20 градус йылылыҡ тәшкил итә.**



Августың "ҡыҙған табаһы"нан һуң был ожмах булып тойолор, әлбиттә. Ләкин уны барыбер иң һуңғы һәм аныҡ күрһәткес тип раҫлап булмай: тәбиғәт кешелекте көтмәгәндә тотоп һынай башланы бит. Һәм, күреүегеҙсә, бындай һынауҙар йышайғандан-йышая. Донъя климатының йылыныуға табан барыуымы был? Әллә, ҡайһы бер белгестәр уйлауынса, һыуыныу алдынан "ҡыҙыныу"мы? Ғалимдарҙың был мәсьәләгә ҡарашы төрлөсә булһа ла бер нәмәлә шик юҡ: планеталағы климаттың ҡырҡа үҙгәреүендә төп сәбәпсе - кеше факторы. Кешелек үҙ ҡулдары менән үҙенә һәләкәтте яҡынайта: предприятиелар һәм транспорт саралары атмосфераға күпләп углекислый газ бүлеп сығара, ә был Ер өҫтө температураһының күтәрелеүенә килтерә. Һәр төрлө экологик һәләкәттәр шунлыҡтан хасил була ла инде, сөнки тәбиғәт үҙенә ҡарата вәхшиҙәрсә мөнәсәбәткә түҙеп тора алмай башлай һәм шуның ҡонон ҡайтара. Ярай, гәзит уҡыусыбыҙҙы хәүефләндермәй торайыҡ, кем ҡыҙыҡһына - үҙе уҡып белһен.

**1 сентябрь** - Белем көнө фәҡәт уҡыусылар менән студенттарға ғына ҡағылмай бит. Йәшенә, һөнәренә ҡарамайынса, һәр кем аҙ ғына булһа ла белем эстәп йәшәргә тейеш. Белем сығанаҡтары күп һәм төрлө бөгөн. Глобаль мәсьәләләр буйынса булмаһа ла, исмаһам, үҙ организмыңды, сәләмәтлегең тураһында хәбәрҙар һәм грамоталы булыу кәрәк һәр кемгә. **8 сентябрҙә** бит ана Грамоталылыҡты таратыу буйынса хатта халыҡ-ара көн дә булдырылған. Шуныһы ерҙә йәшәүҙең ҡыҙығы ла юҡтыр ул. Матурлыҡты күрмәй йәшәгән кеүек. Әйткәндәй, Матурлыҡ көнө лә (**9**) бөтөн донъя кимәлендә юҡҡа ғына билдәләнмәй, моғайын. Әлегә Ер шарында камиллыҡ һәм гармония һаҡлана икән, унда ла кеше факторының өлөшө бар.

**18 сентябрҙә** һөнәри байрамдарын билдәләүсе урмансылар йәшәү сығанағы - йәшеллекте һаҡларға ынтылыштары менән тап ана шулар иҫәбенә инә лә. Тимәк, ижади хеҙмәттә ҡайнап, тәбиғәт ҡанундарына буйһоноп, тыныс йәшәү яҡлылар ҙа күп. Халыҡ-ара тыныслыҡ көнө (**21**) бөгөнгө бер ҡыҙыу баштарҙы ана шул турала иҫкәртеп тора кеүек. Югиһә, донъя аренаһындағы бөгөнгө сәйәси тотороҡһоҙлоҡтоң сәбәптәре ахыр сиктә наҙанлыҡ, тәрбиәһеҙлек кеүек төшөнсәләргә барып тоташа. Юғары мәҙәниәтле, белемле һәм кешелекле шәхестәргә ҡытлыҡ һиҙелә түгелме бөгөнгө донъя сәйәсәте сәхнәһендә? Ярты көүҙәһе менән президент булырға әҙерләнеп, икенсе яртыһы менән клоундай ҡыланған хәсрәт сәйәсмәндәрҙе көн дә телевизорҙан күҙәтәбеҙ бит. Донъя кимәлендә фекер йөрөтөүсе гуманистарҙы, интеллигенттарҙы кем тәрбиәләргә тейеш икән һуң? Был һорауҙы атаәсәләргә генә түгел, ә граждандар тәрбиәләүсе система әһелдәренә төбөү ҙә урынлы булыр, сөнки бала күңеленә иң тәүге изгелек орлоҡтарын мәктәпкәсә йәштәге балалар менән эшләүсе тәрбиәселә һала. **27 сентябрь** улар үҙҙәренең һөнәри байрамын билдәләй. Бөгөн балаһы интернет тәрбиәләй, тип, кемдеңдер әйткәне хәтерҙә ҡалған. Әйткәндәй, был айҙың тәүге һәм иң ахырғы көндәре араһында, ысынлап та, ниндәйҙер бәйләнеш бар түгелме? **30 сентябрь** - Рәсәйҙә Интернет көнө...

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, мөхтәрәм ҡәрҙәштәр: **12 сентябрь - Ҡорбан гәйете.**

**Был айҙағы юбилярҙар:**

**1** - шағир **Ҡәҙим Аралбайға** - 75 йәш (1941).

- яҙыусы **Нажиә Игеҙәйноваға** - 70 йәш (1946).

**2** - фронтовик шағир **Мөхәмәтйәров Хәйҙең** тыуыуына - 105 йыл (1911-1941).

**9** - химия фәндәре докторы, профессор **Райхана Ҡунаҡоваға** - 70 йәш (1946).

**15** -иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Мазһар Иҫәнбаевҡа** - 80 йәш (1936).

- билдәле публицист, журналист, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Марсель Ҡотлоғәлләмовҡа** - 75 йәш (1941).

**19** - СССР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, С. Юлаев ордены кавалеры **Гөлли Мөбәрәковаға** - 80 йәш (1936).

**21** - ҡурайсы, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Йомабай Иҫәнбаевтың** тыуыуына - 125 йыл (1891-1943).

**23** - Башҡортостандың халыҡ артисы **Шәүрә Дилмөхәмәтоваға** - 55 йәш (1961).

**25** - ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, БР Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры етәксеһе **Рәмил Гәйзуллинға** - 55 йәш (1961).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

УҠЫП СЫҠТЫМ...

# ТЕЛДЕ ҺАНЛАМАУ...

## законды һанламау бит инде ул

**"Киске Өфө" гәзитенең 29-сы һанында "Туған телдең батшаһы ла, ҡоло ла - беҙ!" тип аталған бик кәрәкле, көнүҙәк мәҡәләләр тупланмаһы баҫылып сыҡҡайны. Рубрикаһы уҡ әйтеп тороуынса, ысынлап та, баш ҡалабыҙ йөҙөн ап-асыҡ күрһәтә ул.**

Мәҡәләләр шәлкеме Өфө ҡала округы хакимиәтендә үткәрелгән "Грамоталы ҡала" конкурсын йомғаҡлау мәсьәләләре хаҡында. Әйтергә кәрәк, был сара рус теле менән бер рәттән дәүләт теле тип иғлан ителгән башҡорт телен "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законы нигеҙендә баш ҡалабыҙ хакимиәте кимәлендә пропагандалау, үҫтереү һәм һаҡлау маҡсатын күҙҙә тота, тип әйтелә баш һүҙҙә. Бик яҡшы уйланылған кәрәкле эш был, тип иҫәпләйем, сөнки Өфө урамдарындағы хаталы, наҙан яҙыуҙары көн дә тиерлек күреп йөрөү түҙеп торорлоҡ түгел. Дәүләт телдәренең береһенә төкөрөп ҡарауы был? Законды һанламауы?

Һанай китһәң, миҫалдар бик күп. Мәҫәлән, Достоевский урамындағы 73-сө йортта урынлашҡан "Берҙәм Рәсәй" партияһының йәмәғәт ҡабул итеү бинаһы тышындағы алтаҡтала ошо турала фәҡәт рус телендә генә яҙып ҡуйылған. Быны нисек аңларға? Арыраҡ баҙар яғына атлаһаң, бөтәбеҙ ҙә яҡшы белгән һәм бөтәбеҙҙең дә хәтерендә лә, телендә лә һаман "Үҙәк баҙар" тип йөрөтөлгән бинаһарҙың алтаҡтаһынан өйрәнелгән әлеге яҙыуҙар ҙа юҡҡа сыҡҡан. Башҡортсаға тәржемәһеҙ бер атаманан ғына торған магазин, кафелар ҙа етерлек баш ҡалабыҙҙа: "Вкусландия" (Ленин урамы, 41), "Вкусняшка" (Революцион урамы, 55), "Лакомка" (Октябрь проспекты,9), "Артландия" (Октябрь проспекты, 52), артабан тағы ла мәҙәгерәк хәлдәргә тап булаһың: "Елки-палки", "Трын-трава" тигән рестарандар ҙа бар икән әле! Улар шулай уҡ атамаларының башҡортса тәржемәһен яҙыуҙы кәрәк тип тапмаған. Бәлки, руссанан башҡортсаға тәржемә итә алмағандарҙыр, белемдәре етеңкерәмәйҙер? Ул осраҡта белгестәргә мөрәжәғәт итергә кәрәклеген, моғайын, беләләрҙер бит? Тел тураһындағы Законда улар өсөн генә иҫкәрмә эшләмәгәндәр!

Ғөмүмән, алтакталарға иң тәүҙә предприятие, ойошма, магазин, кафе һәм башҡаларҙың башҡортса атамаһы, унан руссаһы яҙылырға тейеш. Өфө ҡала округы хакимиәте Мәғариф идаралығының телдәр сәйәсәте бүлеге ошондай яуаплыҙлыҡ, наҙанлыҡ күренештәренә ҡаршы аяуһыҙраҡ көрәшһен ине. Туған телебеҙгә ҡарата башҡаларҙан да яуаплы һәм ихтирамлы мөнәсәбәт талап итә беләйек.

**Эрнст ЮЛБАРИСОВ,**
**техник фәндәр докторы, геология-минералогия фәндәре кандидаты, Рәсәйҙең почетлы нефтсеһе, Рәсәй Тау фәндәре академияһы академигы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔"Ағиҙел" журналында Рәшит Солтангәрәев исемендәге хикәйәләр конкурсына эштәр ҡабул итеү дауам итә. Хикәйәләр башҡорт телендә яҙыла, темаһы ирекле. Уларҙың күләме 17 биттән артмаҫҡа, жанр талаптарына яуап бирергә тейеш. Конкурсҡа бығаса донъя күрмәгән әҫәрҙәр генә ҡабул ителә. Беренсе урын алыусыға - 15 мең һум, икенсе урын өсөн - 10 мең, өсөнсө урынға биш мең һум аҡса тапшырыла. Шулай уҡ өсәр мең һумлыҡ өс дәртләндереү призы ҡаралған.

✔Ғафури районының Сәйетбаба ауылында Башҡорт балы байрамы уҙҙы. Ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, республиканың Халыҡтар дуҫлығы йорто һәм район хакимиәте. Йәрминкәлә урындағы фермерҙар үҫтергән йәшелсә һәм еләк-емеш тәҡдим ителде.

✔5 сентябрҙә Рәсәйҙә Берҙәм дәүләт имтиханын ҡабаттан тапшырыу башлана. Имтиханда дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үтмәгән йәки унда бер йә иһә ике мотлаҡ предмет буйынса ҡәнәғәтләнерлек билдәһен алмаған уҡыусылар ҡатнашырға хоҡуҡлы. Башҡортостан Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республикала 216 кеше ғариза биргән. Имтихандар Өфөләге 100-сө урта дөйөм белем биреү мәктәбендә ойоштороласа. 5 һәм 14 сентябрҙә уҡыусылар рус теленән, 8-дә һәм йәнә 14 сентябрҙә математиканан һынау тапшыра.

✔Көҙгө сессияла Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары 50-нән ашыу закон проектын ҡарарға ниәтләй. Парламентарийҙар алдында бер нисә яңы закон ҡабул итеү һәм ғәмәлдәгеләренә үҙгәрештәр индереү бурысы тора. Республика Парламенты Рәйесе Константин Толкачёв даими нигеҙҙә эшләгән депутаттар менән осрашыуҙа ошо хаҡта белдерҙе.

✔Түмәндә ҡаяға үрмәләү буйынса Рәсәй беренселеге уҙҙы. Өфө ҡыҙы Ирина Сабитова юниорҙар араһында тиҙлеккә ярышта беренсе урын алды һәм Рәсәйҙең спорт мастеры нормативын үтәне.Салауаттан Алмаз Нагаев йәш үҫмерҙәр араһында тиҙлеккә ярышта өсөнсө урын яуланы. Юниор Данил Закиров (Өфө) Рәсәй беренселегендә күп төрлө ярышта еңеп сыҡты, ауырлыҡҡа ярышта - өсөнсө, боулдерингта - икенсе, ике төр ярышта икенсе булды.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МӘКТӘПТӘР ӘҘЕР

**Яңы уҡыу йылында баш ҡала мәктәптәрендә 107 мең уҡыусы уҡыясаҡ, шул иҫәптән 12 меңдән ашыу бала белем усаҡтарының тупһаһын беренсе тапҡыр аша атлап үтәсәк. Бында шуны ла билдәләп китеү мөһим: 2016-2017 уҡыу йылында балалар һаны былтырғы менән сағыштырғанда өс меңгә күберәк.**

- Бөгөн Өфөлә барлығы 402 белем биреү ойошмаһы: 128 мәктәп, 228 балалар баҡсаһы, 46 өҫтәмә белем биреү учреждениеһы иҫәпләнә, уларҙа 12 мең самаһы педагог эшләй. Атап үтелгән учреждениелар кадрҙар менән 98 процентҡа комплектланған, - тип белдерә ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова.

Уның һүҙҙәренсә, учреждениелаҙҙы яңы уҡыу йылына әҙерләү барышында биләмә ҡоймаларының бөтөнлөгөнә, тышҡы яҡтыртыу сығанаҡтарына етди иғтибар бирелгән. Ҡаланың Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы белем усаҡтары һәм мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары эргәһендәге юлдарҙы тамғалау, юл билдәләре ҡуйыу эштәре менән шөғөлләнгән. Биналарҙың техник торошо тикшерелеп, кәрәкле урындарҙа ремонт эштәре башҡарылған. Йылытыу системалары гидравлик һынау үткән, барлыҡ системалар әҙләкһеҙ эшләһен өсөн ремонт эштәре башҡарылған. Барлыҡ мәғариф учреждениеларында ла полиция саҡырыу өсөн хәүеф төймәһе бар, 82 процентында инеүҙе тикшереү системаһы - турникет, магнит асҡысы, пластик карта эшләй. 89 процент учреждение видеокүҙәтеү системаһы менән йыһазландырылған. Балалар баҡсалары һәм мәктәптәрҙең медицина кабинеттары барлыҡ кәрәкле ҡоралдар менән йыһазландырылған. Спорт залдары, ҡоралдар тикшерелеп, кәрәк урындарҙа нығытылған, спорт залдары яңыртылған, инвестициялар йәлеп итеү иҫәбенә 38 спорт ҡоралы ҡуйылған.

Мәғариф учреждениелары даими рәүештә үҙ биләмәләрен төҙөкләндереү буйынса эштәр алып бара. Был тәрбиәнең бер өлөшө булып та тора, сөнки педагогик коллективтың бурысы - һәр балала үҙ йорто, мәктәбе, ихатаһы, ҡалаһы менән бер бөтөнлөктә тойорға өйрәтеү. Ә Мәғариф һәм Коммуналь хужалыҡ идаралыҡтары берлектә мәғариф учреждениелары биләмәләрен, юлдарын асфальтлау, йәшелләндереү, ағастар, ҡыуаҡтар ултыртыу, бәләкәй архитектура формалары, спорт майҙансыҡтары урынлаштырыу менән шөғөлләнә.

Өфө мәктәптәрендә туҡланыу "Мәктәп һәм балалар туҡланыуы үҙәге" (Дим, Киров, Ленин, Совет райондарының 55 мәктәбе), "Спектр" мәктәп һәм балалар туҡланыуы комбинаты (Калинин һәм Орджоникидзе райондарының 45 мәктәбе) муниципаль предприятиелары, "Балалар һәм диетик туҡланыу үҙәге" (Октябрь районының 24 мәктәбе) муниципаль автоном учреждениеһы тарафынан ойоштоҙола. Аҙыҡ-түлек мәғариф учреждениеларына операторҙарҙың үҙҙәренең махсуслаштырылған автотранспорты менән килтереләсәк. Былтырғы уҡыу йылында аҙыҡ-түлек блоктарының ярымфабрикаттарға күсеүе тулыһынса тамамланған. Ярымфабрикаттар тәбиғи аҙыҡ-түлектән юғары сифат стандарттарын үтәп әҙерләнеп, вакуумлы тышлыҡтарҙа килтерелә. Яңы уҡыу йылында мәктәп туҡланыуына һөттән һәм тундырманан һөт коктейлдәре индереү күҙаллана. Шулай уҡ "Диетик туҡланыу рационы" пилот проекты ла эшләй башлаясаҡ.

**Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғлүмәт-аналитика бүлеге.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "100 ЙЫЛЛЫҠҠА - 100 ОБЪЕКТ"

# ИЗГЕ ТАУҘА...

## ырыуҙарға һәйкәл



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың баш ҡала гәзиттәренә биргән интервьюһында республиканың 100 йыллығына арнап 100 объект төҙөү йәки реконструкциялау тәҡдиме уңайынан гәзиттә һорау алыу үткәргәс, халыҡтан матур, фәһемле фекерҙәр яуа башланы. Улар бөгөн барыбыҙҙы ла борсоған мәсьәләләрҙе күтәреүе менән дә әһәмиәтле. Шуға күрә, яңы рубрикабыҙға үҙегеҙҙең районығыҙҙа, ауылығыҙҙа, ҡалағыҙҙа, Башҡортостандың баш ҡалаһында ниндәй объекттар төҙөлөүе, реконструкцияланыуы мөһим икәнлеген күтәреп сыҡҡан тәҡдимдәр көтәбеҙ.**

***Илгиз СОЛТАНМОРАТОВ, "Юлбарс" турфирмаһының директор ярҙамсыһы:*** Шундай мөмкинлек бирелгәс, иң беренсе нәүбәттә Торатау итәгендә төҙөү планлаштырылған Ырыуҙар ташы тарихи-мәҙәни комплексын төҙөү мәсьәләһен тағы бер тапҡыр күтәреп сығыр инем. Милләтебеҙ өсөн изге тип һаналған тау итәгендә шундай комплекс күптән булдырылһа, уны эшкәртеү тураһында һүҙ ҙә күтәрелмәҫ ине. Икенсе яҡтан, ул комплекс туризмда бер ылыҡтырыу үҙәге булып торор һәм Башҡортостандың бер сағыу урыны булыр ине, сөнки унда ситтән килгән туристар ғына түгел, республика халҡы ла күпләп йөрөр ине.

Беҙгә Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Чечня өлгөһөнән сығып, үҙебеҙҙең изге урындарҙы төҙөкләндереү, унда туристарҙы күпләп йәлеп итеү тураһындағы мәсьәләне күтәрергә кәрәк. Башҡортостан - әүлиәләр иле. Һәр бер башҡорт ауылы эргәһендә ошондай урындар - шишмәләр, матур күркәм урындар, зыяраттар бар, халыҡ ул ерҙәргә йыл әйләнәһенә ағыла. Власть органдарына, бизнесҡа ошо урындарҙы төҙөкләндереп, турҙар ойоштороп ҡына ебәрергә кәрәк.

Тағы: әлегәсә беҙҙең милли ҡомартҡыбыҙ булған бөйөк "Урал батыр" эпосы һәм уның менән бәйле урындарҙы бер концепция нигеҙендә ойошторорға кәрәк. Был, әлбиттә, ҙур проект, әммә уны килеһе быуындар өсөн эшләргә кәрәк һәм быны тап ошо акция сиктәрендә башлап ебәргәндә маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Туристарға Урал батырҙы бөтөнләй бер әкиәт батыры кеүек итеп кенә еткерәләр, сөнки уны беҙ үҙебеҙ ҙә баһалап бөтмәйбеҙ.

Ғөмүмән, башҡорттоң ниндәй генә кәсебен алып ҡараһаң да, шуға бәйле туризм комплексы асырға мөмкин. Мәҫәлән, агротуризм һәм этнотуризм. Ошо өлкәлә уныһы шлы эшләп йөрөгән фермерҙарыбыҙ бар. Ҡымыҙ, ат-йылҡылар, умарта-солоҡтар, бөгөнгәсә һаҡланған кәсептәрҙе күрһәтеп, ағас еҫе аңҡып торған ыҡсым йорттарҙа ҡундырып, милли аш-һыу менән һыйлап, бик күп туристы йәлеп итеп булыр ине, тип уйлайым һәм ошо йүнәлештә лә эш алып барыуҙы күҙ уңынан ысҡындырмайыҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА яҙып алды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠОРТ БАЛЫ - ҠЫТАЙҘА

**Ҡытайҙа башҡорт балы ҙур һорау менән файҙалана. Бер ай элек кенә продукцияның тәүге партияһы Ҡытай Халыҡ Республикаһының Синьцзян-Уйғыр автономиялы районына оҙатылғайны. Әле яңы экспорт партияһына килешеү төҙөлгән.**

Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәгенең генераль директоры, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Әмир Ишемғолов хәбәр итеүенсә, продукцияның һынау партияһы урындағы лабораторияларҙа тикшерелгән һәм импортер илдең талаптарына тулыһынса тап килгән сифат сертификатына эйә булған. Ҡытайҙа Башҡортостандың брендлы продукцияһы һатып алыусыларҙа ҙур һорау менән файҙаланған. "Әле Ҡытай Халыҡ Республикаһының ошо уҡ районындағы икенсе фирманан заказ килде. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә килешеү төҙөлдө. Беҙ тауар өсөн аҡсаны алдыҡ һәм бөгөн 4 тонна бал оҙатабыҙ", - тип һөйләнә Әмир Ишемғолов.

# ИКМӘК БУЛҺА...

**Әлеге мәлгә республика аграрийҙары яҡынса 3,214 миллион тонна ашлыҡ йыйған.**

Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, 11 райондың һәр берәһе 100 мең тоннанан ашыу иген йыйған. Стәрлетамаҡ (152 мең тонна), Саҡмағош (130 мең), Илеш (128 мең) һәм Мәләүез (124 мең) районы хужалыҡтары башҡаларҙан күберәк ашлыҡ һуҡҡан. Республикала 1,714 миллион гектар майҙанда (96 процент) иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар сабылған, 1,7 миллион гектарҙа (95 процент) һуғылған. Әле гектарҙан уртаса уңыш 18,9 центнер тәшкил итә. Саҡмағош районы игенселәре алда бара, улар һәр гектарҙан 30,5 центнер уңыш ала.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Рәсәй Хөкүмәте Төркиәгә чартер рейстарын асырға рөхсәт итте. Премьер-министр Дмитрий Медведев Рәсәй һәм Төркиә араһында чартер һауа юлына сикләүҙе алыу тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Чартер рейстары юлламаларҙың хаҡын 20-30 процентҡа кәметергә мөмкинлек бирә. Йыл башында "Төрөк авиалиниялары" вәкилдәре хәбәр иткәнсә, илдәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең ҡатмарлашыуы арҡаһында Өфө - Истанбул - Өфө пассажирҙар ағымы 50 процентҡа кәмегән.

✔Башҡортостанда йылғаларҙың һайығыуы күҙәтелә. Республиканың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторинг идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, был йәйҙең ҡоро килеүенә бәйле.

✔"Башҡортостан" телерадиокомпанияһы "Мәҙәниәт" телеканалы менән берлектә "Зәңгәр ҡош" икенсе бөтә Рәсәй йәш таланттар конкурсына ҡатнашыусылар һайлап алыуҙы дауам итә. Конкурстың төбәк этабы Өфөлә тәүгә уҙа. Башҡортостан" дәүләт концерт залында вокалистарҙы һәм музыканттарҙы тыңлау ойошторолдо. Телеүҙәктең концерт залында башҡа номинанттар ҙа һөнәрен күрһәтә ала. Яңы миҙгелдең һайлап алыу турында 5 йәштән 15 йәшкәсә балалар һәм үҫмерҙәр ҡатнаша.

✔Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы Экология һәм айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылының эмблемаһына һәм слоганын эшләү конкурсында ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул итә. Конкурсҡа 2016 йылдың 1 ноябренә йомғаҡ яһала. Ғаризалар һәм проекттар быйыл 1 октябргә тиклем nikandrova.n@bashkortostan.ru электрон почтаһына йәки Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 86, 213-сө бүлмә адресы буйынса ҡабул ителә. Белешмә өсөн телефон: (347) 218-04-29.

✔Башҡортостандың Туймазы районында урынлашҡан "Кандракүл" тәбиғәт паркы "Республиканы ас" проекты сиктәрендә егерме туристик объект иҫәбенә инде. Тәбиғәт паркы хакимиәте мәғлүмәттәре буйынса, июнь айында күл буйында 13,5 мең, июлдә иһә 55,5 меңдән ашыу кеше ял иткән. Парк хеҙмәткәрҙәре контроль-үткәреү пунктарында тап шунса ял итеүселәрҙе теркәгән. Был рекордлы һан, сөнки былтыр бында 46 мең кеше килгән.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**1961 йылда күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән, етем балаларға ярҙам итеү ниәтенән асылған һигеҙ йыллыҡ 4-се мәктәп-интернат 1965 йылда БАССР Министрҙар Советы ҡарары менән Республика урта һынлы сәнғәт мәктәп-интернаты итеп үҙгәртелә. Был уҡыу йортонда Башҡортостандың төрлө төбәктәренән йыйылған һәләтле 420 уҡыусы белем алған. Ошо уҡыу йорто нигеҙендә 1994 йылда Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты булдырыла һәм Ҡасим Асҡар улы Дәүләткилдиев исеме бирелә.**



# ҺҮРӘТТӘРҘӘ...

## рухи ҡиммәттәребеҙ

Әлеге көндә Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты төп һәм өҫтәмә белем биреүҙе берләштергән уҡыу йорто. Бында уҡытыу барышында һәм дәрестән тыш эшмәкәрлек аша балаларҙы шәхес итеп тәрбиәләү, уларҙың һәләттәрен арттырыу, белем даирәһен киңәйтеү, төрлө яҡлап үҫтереү бурыстары бойомға ашырыла. Һынлы сәнғәт нигеҙҙәрен дәрестәрҙә тәрәнәйтеп өйрәтеүҙән тыш, өҫтәмә рәүештә һүрәт, рәсем сәнғәте, композиция, скульптура, материалдарҙы художестволы эшкәртеү, художество-производстволы графика (һыҙым), һынлы сәнғәт тарихы, компьютер графикаһы буйынса белем бирелә. Гимназия-интернатта республиканың төрлө райондарынан һәм Рәсәй төбәктәренән йыйылған 315 бала уҡый. Уларға һынлы сәнғәт серҙәренә төшөнөү өсөн бөтә мөмкинлектәр булдырылған: дәрестәр заманса йыһазландырылған кабинеттарҙа үтә, скульптура, биҙәү-ғәмәли сәнғәт менән шөғөлләнеү өсөн оҫтаханалар, информатика һәм компьютер графикаһы кабинеттары бар.

2005 йылдан алып ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәптәре рәтенә индек. "Һәләтле балалар - Рәсәй киләсәге" тип аталған энциклопедияла беҙҙең гимназия уҡыусылары тураһында һәм "Ватан кадрҙарының алтын фонды" Бөтә Рәсәй энциклопедияһына белем усағыбыҙ тураһында яҙып сығыуҙары эшебеҙ юғары баһаланыуына ишара булды. Иң мөһиме, беҙ уҡыусыларҙы бары тик техник оҫталыҡҡа ғына өйрәтеп ҡалмайбыҙ, уларға һынлы сәнғәт аша рухи тәрбиә биреүҙе лә маҡсат итеп алғанбыҙ. Шуға күрә, уҡыусылар ниндәй темаға ижад итһә лә, һәр нәмәне төптән өйрәнеп, күңеле аша үткәреп эшләй. Мәсәлән, балалар йыл да "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосындағы сюжеттарҙы һынландыралар, Өфө ҡалаһының боронғо йорттар һаҡланған урамдарын рәсемгә төшөрәләр, йәйге каникулдарҙа тыуған яғының тәбиғәтен, башҡа төрлө әҙәби әҫәрҙәрҙе лә сағылдырған эштәр була. Бер үк нәмәне һәр кем төрлөсә башҡара, үҙенең һүрәте аша ниҙер әйтергә теләй, фекерҙәрен белдерә. Был эштәрҙә башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәре, мәҙәниәте, тарихы, холоҡ-фиғеле, йолалары - барыһы ла урын ала. Өлгөлө картиналарҙы "Кояшҡай" тип аталған күргәҙмә залына эләбеҙ, уҡыусылар бер-береһенең һүрәттәрен ҡарай, анализлай, өйрәнә. Был уҡыусыларға уҡытыу программаһы буйынса алған белемдәрен ятлап, иҫтә ҡалдырыуҙан тыш, үҙаллы фекерләргә, анализларға, үҙ ҡарашын белдерергә булышлыҡ итә. Улар һәр предметтың айышына төшөнөп, һүҙ нимә тураһында барыуын яҡшы аңлап тора.

Һынлы сәнғәткә ҡағылышлы дәрестәр, түңәрәктәрҙән тыш, балаларға бейеү, йыр, спорт буйынса түңәрәктәрҙә лә шөғөлләнеү мөмкинлеге асыҡ. "Йәйғор" тип аталған гимназия гәзитен сығарыусы ижади балалар уҡыу йортондағы бөтә яңылыҡтарҙы, тиҫтерҙәренең уңыштарын яҡтыртып бара. Бына шулай белем усағын тамамлаусы уҡыусылар артабан Мәскәү, Санкт-Петербург, Өфө, Ҡазан, Магнитогорск, Екатеринбург һәм башҡа ҡалаларҙағы архитектура, дизайн, художестволы графика йүнәлештәре буйынса уҡыуҙарын дауам итергә әҙерләнә. Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты кескәйҙән һынлы сәнғәткә ғашиҡ балаларға ошо йүнәлештә нигеҙле белем алырға ярҙам иткән тәүге баҫҡыс.

**Гөлйемеш САДИҠОВА,**
**Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназияһы директоры.**

ӘЙТӘГҮР!

# ВАНДАЛДАР ҮҪТЕРМӘЙЕК...

**Өфө ҡала округы мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһендә быйыл БР Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Павел Качкаев, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Йомабикә Ильясова, Өфө райондары хакимиәттәре башлыҡтары, ҡаланың белем биреү учреждениелары етәкселәре, педагогтар ҡатнашты. Кәңәшмәлә сығыш яһаусылар баш ҡаланың белем усаҡтарында уҡытыу-тәрбиә эштәре кимәлен күтәреү, һөнәри стандарттар буйынса һорауҙарға аныҡлыҡ индереү, балаларға өҫтәмә белем биреү һәм башҡа мәсьәләләрҙе күтәрҙе. Түбәндә - кәңәшмәлә ҡатнашыусы бер нисә педагогтың фекере.**

***Айгөл ШӘРӘФЕТДИНОВА, Өфө ҡалаһының 282-се балалар баҡсаһы директоры:*** Мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһендә мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында ниндәй түңәрәктәр асыу тураһында ла һүҙ булды. Баш ҡаланың 30-сы балалар баҡсаһы ошо юҫыҡта үҙҙәренең эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Улар балалар баҡсаһындағы бер төркөмдә төрлө эшсе һөнәрҙәре менән таныштырып, "Йәш төҙөүсе" тигән программаны тормошҡа ашыра. Программа сиктәрендә балалар өсөн төрлө һөнәр кешеләре менән осрашыуҙар үткәрелә, ойошмаларға һәм предприятиеларға, төҙөлөш урындарына экскурсияға ла йөрөйҙәр. Былар барыһы ла бөгөн республикалағы эшсе һәм инженер һөнәрҙәренә ҡытлыҡ кисереүгә бәйле икәне аңлашылалыр.

Беҙҙең 282-се балалар баҡсаһының үҙенсәлеге шунда - башҡорт һәм татар төркөмдәренән тыш, ике логопедик төркөм бар. Был төркөмдәргә бөтә балалар ҙа йөрөй һәм улар менән белгестәр эшләй, белем биреү программаһы рус телендә алып барыла. Әлбиттә, башҡорт йәки татар төркөмөнә йөрөгән балалар артабан да туған телендә һөйләшеп үҫһен, фекерләһен өсөн ошо телдәрҙе белгән логопедтар кәрәк. Тик ата-әсәләр, ниңәлер, был мәсьәләгә битараф, ниндәй телдә булһа ла баланың телмәре үҫешһен, дөрөҫ һөйләшһен, тигән теләктән сығып фекер йөрөтәләр. Киләсәктә, бәлки, ата-әсәләр ошо мәсьәлә буйынса ла уйланыр, тим.

***Илһам ҒАЙСИН, Өфө ҡалаһының 102-се башҡорт гимназияһы директоры:*** Кәңәшмәлә ҡала мәктәптәре ашханаларының быйыл тулыһынса ярымфабрикатҡа күсерелеп бөтөүе тураһында мәғлүмәт еткерелде. Был аҙыҡ тейешле кимәлдә сифатлы әҙерләнә икән, ата-әсәләргә балаларҙың һаулығы өсөн ҡайғырмаҫҡа мөмкин. Беҙҙең гимназия күптән аҙыҡ комбинаты менән берлектә эшләй, сырье алыу өсөн улар үҙҙәре төрлө ойошмалар менән килешеүҙәр төҙөй. Ашханабыҙҙа комбинаттың аш-һыу әҙерләүселәр бригадаһы өсөн бөтә уңайлыҡтар булдырылған. Шуға гимназия етәкселеге лә, ата-әсәләр ҙә балаларҙың һаулығы, аҙыҡ-түлектең сифаты өсөн артыҡ борсолмайбыҙ. Әммә ашханала әҙерләнгән ризыҡтарҙы көн дә ҡарап торабыҙ, айына бер тапҡыр гимназияның ата-әсәләр комитеты рәйесе һәм үҙебеҙҙең комиссия менән планлы рәүештә тикшереүҙәр үткәрелә. Бешерелгән ризыҡтың сифатына, тәменә, әҙер ризыҡтарҙың дөрөҫ һаҡланыуына иғтибар итәбеҙ. Балаларҙың һаулығына ярымфабрикат аҙыҡ-түлектән зыян килмәй, тип, ата-әсәләрҙең хәүефләнеүе урынһыҙ икәнен иҫкәрткем килә.

**Әйткәндәй, кәңәшмәлә педагогтар, мәғариф учреждениелары етәкселәре нимә ишетергә теләгән, шул мәғлүмәтте алды, тиергә мөмкин. Ләкин уларҙың эше ниндәйҙер ойоштороу мәсьәләләре менән генә бөтмәй, улар бөгөн бөтөн шарттар булдырылған эш урынында балаларҙы үҙ иленең, үҙ ҡалаһының патриоты итеп тәрбиәләүгә ең һыҙғанырға тейеш. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың ошо юҫыҡта әйткәндәре менән килешмәй булмай: "Бөгөн беҙҙең ҡаланы вандалдар баҫып алды. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшселәренең күп көс һалып башҡарған хеҙмәте юҡ ителә. Ошо көндәрҙә "Ике фонтан майҙаны"нда фонарҙарҙы ваттылар, парк һәм скверҙарҙа ултырғыстарҙы, суйындан эшләнгән әйберҙәрҙе, скульптураларҙы емерәләр. Ә бит һуңғы биш йылда баш ҡалала биш йөҙҙән ашыу спорт майҙансығын ошондай көсөн ҡайҙа ҡуйырға белмәгән йәштәр шөғөлләнһен өсөн төҙөнөк. Мәктәптә бына нимәгә өйрәтергә кәрәк..." Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Кейәү ҡамсыһы

❖ Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары, бөйөр эсәге сей яраһы, гипертония, бөйөр, бауыр, ашҡаҙан аҫты биҙе һәм бәүел ҡыуығы сирҙәре мәлендә бик матур атамалы үлән - кейәү ҡамсыһы (зопник) ҡулланығыҙ. 2 ҡалаҡ кейәү ҡамсыһы үләне һәм сәскәһенә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, йылы әйбергә урап 5-6 сәғәт төнәтергә. Һеҙергә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 1,5-1 сәғәт алда 100-әр мл эсергә. Дауаланыу курсы - 24 көн, 10 көн ял иткәндән һуң, тағы ҡабатлайбыҙ. Был һауыҡҡансы дауам итә.

❖ Тиҙ үҫешкән лейкоз, лейкемиянан, яман шеш ауырыуҙарынан да дауалай. 4-5 ҡалаҡ кейәү ҡамсыһы үләне һәм сәскәһенә 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 5-6 сәғәт төнәтергә, һеҙергә һәм ашарҙан 1 сәғәт алда 50-әр мл эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Дауаланған мәлдә спиртлы эсемлек эсергә, тәмәке тартырға ярамай.

### Балыҡ майы

❖ Әгәр ҙә көнөнә 3 тапҡыр ашаған ваҡытта 5-әр капсула балыҡ майы ла ҡабул итһәгеҙ, быуындарығыҙҙы сәләмәтләндерәһегеҙ, ҡан баҫымын нормаға килтерәһегеҙ, шулай уҡ папилломанан ҡотолаһығыҙ.

### Артроз

❖ Артроз мәлендә һыҙланыуҙы баҫыу өсөн: 3 ҡалаҡ ваҡланған лавр япрағына 200 мл көнбағыш йәки етен майы ҡойорға, 6 көн йылы урында тоторға, һөҙөргә һәм һыҙлаған урындарға һөртөргә.

### Теш һыҙлағанда

❖ Теш һыҙлаһа, тешкә сей сөгөлдөр киҫәге һалығыҙ.

### Тире сирҙәренән

❖ Диатез менән дерматитты дауалау өсөн 3-4 эстрахан сәтләүегең мейесте көрән төҫкә ингәнсе бешерергә. Һыуынғас, ярырға һәм сәтләүектәрҙе иҙергә, балыҡ майы ҡушып, компресс итеп һалырға. Кипһә, тағын алыштырырға. Оҙаҡ та үтмәй, тире таҙара.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Минең бит уны көслө терәк, ир, балаларҙың атаһы итеп күргем килә, шуға ысын-ысындан ышанғым килә. Тик ир булып алғас, ҡул күтәрер, эсер, йәберләр, тип ҡурҡам. Шулай булыры һиҙелә.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Хроник үпкә ауырыуҙарын дауалау өсөн нигеҙҙә андыҙ ҡулланылған. Ашҡаҙан-эсәк тракты зарарланғанда файҙаланылған үҫемлектәрҙең һаны ла байтаҡ: ауыҙ эсе шешкәндә имән ҡайырыһы, әҫпе еләге ҡайнатмаһы менән ауыҙ сайҡатҡандар, әҫпе еләген сәйнәгәндәр. Ауыҙҙан еҫ килгәндә һағыҙ һәм ҡәнәфер сәйнәгәндәр. Һағыҙ ылыҫлы ағастар сайырынан йәки ҡайын туҙынан әҙерләнгән. Теш һыҙлауҙы баҫыу өсөн балтырған, бәйғәмбәр сәскәһе тамырын, йорт һуғанын сәйнәргә йәки һыҙлаған теш өҫтөнә тәмәке онтағы, ағас сайырын һалырға кәңәш иткәндәр. Теш үтә ныҡ һыҙлағанда тилебәрән орлоғон көйҙөрөп, шул төтөндә уртлағандар. Боронғолар һөйләүенсә, ошолай ыҫлап дауалағанда, ҡайһы саҡ серек тештән "ваҡ ҡорттар" төшә имеш. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: был күренеш хаҡында урта быуаттарҙа йәшәгән атаҡлы табип-ғалим Әбүғалисина ла яҙған. Ашау теләген уятыу өсөн әрем һәм юл япрағы төнәтмәһен эскәндәр. Күңел болғанғанда ҡара ҡарағат төнәтмәһен эсергә кәңәш иткәндәр. Кеше оҙаҡ ваҡыт ашҡаҙан ауырыуы менән яфаланғанда андыҙ тамырынан әҙерләнгән дауа ҡабул ителгән.

Ҡайһы бер үҫемлектәр тире ауырыуҙарын дауалағанда ҡулланылған. Экзема (тимерәү) сабыртмаһын селек һуты менән сылатҡандар. Селек һутын алыу өсөн сей селек сыбығын утта еңелсә ҡыҙҙырғандар һәм селек һуты сыбыҡтан ағып сыҡҡан. Экзема сабыртмаһын тилебәрән, ҡара зирә, киндер орлоғон көйҙөргәндә сыҡҡан төтөнгә лә тотҡандар. Ҡамасау үләне, нумия тамыры, тилебәрән орлоғо, асы ҡаҡы һәм ҡайын дегетенән дауа майы әҙерләнгән. Экземаға ҡаршы шулай уҡ ерек һәм йәбешкәк ерек төнәтмәһе, балан, ҡайын еләге һуты ла һөрткәндәр. Тәңкәле тимерәүҙе (псориаз) һәм ҡоро тимерәүҙе (невродермит) дауалағанда, һаналған саралarҙан тыш, алоэ һутын һөртөп дауалау факты ла билдәле. Кесерткән биҙгәге йонсотҡанда бешекләнгән эре кесерткән менән сабынғандар. Шулай уҡ ҡырмауыҡ (һырлан) үләне төнәтмәһе менән сылатыу билдәле. Тәндең ҡысытыуын баҫыу өсөн уны имән ҡайырыһы, ат ҡуҙғалағы, аҡһырғаҡ төнәтмәһе менән ыуғандар. Ала ауырыуы (витилиго) таптарын бөтөрөү өсөн башлы һуған һуты менән сылатҡандар. Сөйәлде һөтлөкәй, сөйәл үләне һуты йәки имән ҡайырыһы төнәтмәһе менән эшкәрткәндәр. Тәндәге яман шешкә һабын үләне төнәтмәһе һөрткәндәр.

Баштың ҡауаҡлауын бөтөрөү өсөн уны ҡайын төнәтмәһе һыуы менән йыуғандар, ә сәс үҫеүҙе яҡшыртыу ниәтендә мәтрүшкә, имән ҡайырыһы төнәтмәһе ҡулланғандар.

Сейләнгән урынға киптерелеп онталған имән ҡайырыһы, ағас өҫтөндә үҫкән бәшмәк ороһо, сөрөк һипкәндәр.

Һйыҡтан (скрофулодерма) һауығыу өсөн лауыр (ҡылауыр) үләне төнәтмәһен эскәндәр, ә уның япраҡтарын тиренең зарарланған еренә япҡандар. Һйыҡты шулай уҡ тилебәрән, ҡара зирә, киндер орлоғон көйҙөргәндәге төтөн менән төтәткәндәр. Ошондай уҡ төтәтеү сей яралы сабыртма ҡалҡҡанда, ҡолаҡтан эрен килгәндә лә ҡулланылған. Сиҡандар йыш сыҡһа, ҡомалаҡ, лауыр үләне төнәтмәһе эскәндәр, сиҡан өлгөрөп, тиҙерәк һытылһын өсөн уға юл япрағы, әсе ҡамыр баҫҡандар.

Таҙҙы, ҡысынманы һәм ҡырҡылсан тимерәүҙе дауалау өсөн аҡһырғаҡ тамыры төнәтмәһе һөрткәндәр. Был ауырыуҙарҙы дауалау өсөн киптереп онталған асы ҡаҡы тамырынан, дегеттән дауа майы ла әҙерләнгән.

Ағас көлөн файҙаланыу киң таралған булған. Уҫаҡ, ҡарағас көлө бигерәк тә шифалы тип иҫәпләнгән. Көл менән ҡысынма булғанда ыуынғандар. Эренле яраны, эренле-ҡутырлы тире ауырыуҙарын дауалау өсөн көл ҡатыштырып, дауа майы әҙерләнгән. Дауалау маҡсатында көл һелтеһе бигерәк тә йыш ҡулланылған. Һелтене әҙерләү тәртибе түбәндәгесә: 1-2 килограмм көлдө бер биҙрә ҡайнар һыуға һалып бутайһың. 1-2 сәғәт үтеүгә һелте "өлгөрә". Һелте шыйыҡсаһы ҡысытыуҙы баҫыу, ҡысытманы һәм башҡа тире ауырыуҙарынан ҡулланыла. Һелте менән башты ла йыуалар, сәс яҡшы таҙара, сәстең ҡойолоуы, баштың ҡысытыуы кәмегән.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

**Бер ҡыҙҙан хат алдыҡ. Бөгөнгө ҡыҙҙарҙың күпселегенә хас булған һорауҙар ҡуйыла унда. Шуға күрә, кәңәш тә дөйөмләштерелеп бирелә. Әгәр егеттең холоҡ-фиғеленә хас булған сифаттарына ҡушып, уның теге йә был шарттарҙа үҙен нисек тотоуы күрһәтелһә, йә башҡа төрлө шәхсән мәғлүмәттәр булһа, яуап та аныҡыраҡ булыр ине.**

# ҒАИЛӘМЕ?

## Ул мөхәббәт сәскәһен йә һулыта, йә емеш бирҙерә



"Үәт, исмаһам, быны менән ғаилә ҡорорға була", тип, башкөллө яратырлыҡ егеттәр һирәк бөгөн, - тип яҙа Көнһылыу исемле ҡыҙ. - Бына мин һәр байрамда, һәр ялда ауылға ҡайтам. Дуҫтарым менән осрашҡан саҡтарҙа нисек кенә күңелле булмаһын, тәбиғәт үҙенекен талап итә: күңел наҙ, иғтибар көҫәй, барыһы ла парлы булғанда, айырыуса ҡыйын. Мин дә таптым шулар араһынан күңел өсөн генә берәүҙе. Ваҡыт бушҡа уҙмаһын, йыуаныс эҙләгән күңел зарығып йөрөмәһен, тип уйланым. Осрашыуҙар артты. Ауыр саҡта ышыҡланып, күңелле мәлдә уйнап-көлөп йөрөй торғас, күнегеп киттем уға. Хәҙер иһә бәләкәс кенә бер тойғо ярала башлағандай. Үҙем һаман "Ярай, үҙемә тиңде осратҡас та, ташлашырбыҙ быны менән", тип йыуанам. Ни өсөнмө? Был һорауға үҙем дә төрлө яҡлап яуап эҙләйем. Тик уға кейәүгә сығыуҙан Хоҙайым һаҡлаһын, тием. Берҙән, үҙем юғары белем алып, кеше булырға тырышып ятҡанда, тормош иптәше итеп белемле кешене һайлағым килә. Йүнле эш табыр өсөн диплом кәрәк. Уҡыған кешегә ҡараш башҡа. Киләсәктә иһә уҡымаған кешегә айырыуса ауыр буласаҡ. Ярай, эш белемле булыуҙа түгел, ти. Профессорҙар араһында ла берәҙәк хәлендә йөрөгәндәр бар. Уҡымаған булыуына ла ризамын. Дипломлы иҫәрҙәр, дипломһыҙ аҡыллылар бар. Йүнсел булһа, хәстәрен табыр. Дипломды һатып алырға ла була, әммә үҙен уҡытып алыу мөмкин түгел: теләге лә юҡ, уҡый ҙа алмаясаҡ - базаһы һай. Уны уҡытыу өсөн балаларҙың өлөшөн бүлеп, уртаҡ килемде һәм энергияны сарыф иткем дә килмәй. Тағы ла шуныһы: уны уҡытыу - тимәк, уны хәстәрләү ул. Баштан уҡ минең хәстәрләүгә өйрәнеп, хәстәрләү бурысын ғүмер буйы мин үтәүгә күнегәсәкбеҙ.

Уның менән еңел-елпе темаларға ғына һөйләшергә мөмкин. Ғаилә, бала тәрбиәләү, бер-береңде сетерекле хәлдәрҙә аңлай белеү кеүек үтә нескә, ләкин ҡатмарлы нәмәләрҙе уртаҡлашып булмай. Дөйөм ҡиммәттәрҙе аңлап бөтмәй. Ярай, уныһы менән дә көрәшербеҙ, ти. Тик уртаҡ аңлашыуҙар таба алмай, үҫеш тә ике кимәлдә барыу сәбәпле, үҙен минән кәм күреп, ирлек дәрәжәһе төшөп ҡуймаҫмы? Минең бит уны көслө терәк, ир, балаларҙың атаһы итеп күргем килә, шуға ысын-ысындан ышанғым килә. Тик ир булып алғас, ҡул күтәрер, эсер, йәберләр, тип ҡурҡам. Шулай булыры һиҙелә. Ҡалалағы дуҫтары менән эскеләп ала. Көнләшә. Үпкә, үс һаҡлай. Мине шәхси әйбере кеүек күрә. Ятҡанға ғына өндәшмәй әлегә, тыйылып тора. Ә тормош гел яратыуҙан ғына тормай. Документҡа мисәт баҫылғас та үҙенекен тылҡыясаҡ. Ыңғай яҡтарын да күрәм: кешеләргә ярҙамсыл, шаян, маҡсатлы, йүнсел, ғәҙеллек ярата, алдашмай, туғандары өсөн өҙөлөп тора, йомарт.

Нисә тапҡыр араларҙы өҙөргә тырыштым. Ял көндәрендә Өфөлә ҡалып, башҡа егеттәр менән танышыр урынға, тағы ҡайтып китәм янына. Яңғыҙлыҡтан ныҡ арыйым да, йәнә үҙем шылтыратам. Ә ул белә минең шул йомшаҡлығымды - шатланып ҡаршы ала. Мөнәсәбәттәрҙе өҙөү-өҙмәү минән тора. Эгоист та түгел үҙем: осҡан ҡоштан да көнләшеп, үҙәгемә үткән саҡтары булһа ла, илаһа ла, кәмһетһә лә ғәфү итәм.

Ваҡыт үткән һайын аҡыл арта, әле теге, әле был етешһеҙлеге күренә. Идеаль кеше булмағанын да беләм. Үҙем дә Алланың ҡашҡа тәкәһе түгел. Уның менән бәхетле була алмаясаҡмын. Тик нимә табам һуң мин унда, ниңә өҙә һуғып ҡына китә алмайым? Нисек көс табырға?

***Кәңәште психология фәндәре кандидаты Римма САФИНА бирә:*** Көнһылыу, һорауҙарыңа иң дөрөҫ яуапты һинең үҙеңдән башҡа бер кем дә таба алмай. Шулай ҙа тел төбөңдө аңларға тырышып, һинең осраҡта ниндәй кәңәш мөһимерәк булыуы тураһында уйланайыҡ.

Беренсенән, теләгеңде асыҡларға кәрәк: һин ни теләйһең? Ғаилә ҡороу өсөн һиңә ниндәй егет кәрәк? Әгәр ҙә егетеңдең насар яҡтарын күрәһең икән, тимәк, һин уны яратмағанһың, йәки һыуынып өлгөргәнһең. Ғашиҡ кеше бит һөйгәнен нисек бар, шул килеш ярата, хатта уның кәмселектәрендә лә ыңғай яҡтар эҙләй. Ҡыйын саҡтарында ул һөйгәненә ярҙамға ашыға, үҙ мәнфәғәттәрен, "мин"ен икенсе урынға ҡуя, сөнки ғашиҡ кеше күп нәмәгә күҙ йомоп ҡарай.

Икенсенән, был көнгә тиклем арағыҙ өҙөлмәгән һәм һин уның менән осрашыу эҙләйһең икән, тимәк, ул һиңә ҡайһылыр бер сифаттары менән ҡәҙерле. Шуға күрә киләсәк тураһында ла уны ҡушып уйларға батырсылыҡ итәһең. Әммә һин маҡсатыңа бик тиҙ ирешергә теләйһең, бөтәһе лә һин теләгәнсә генә бер көндә булмай бит. Үҙ бәхетен һәр кем үҙе сүкей. Ҡайҙан көс алырға, тиһең. Көс бит һинең үҙеңдә. Ә инде матурлыҡҡа, яҡшылыҡҡа ынтылыу - тәбиғи күренеш. Ваҡыт үтә килә, әлбиттә, егетеңә ҡарата фекереңде дә үҙгәрә, улар, бер килеш ҡалмай, яңы кимәлгә күсә. Бындай һынауҙарҙы икегеҙ ҙә үтәһегеҙ.

Статистикаға килгәндә инде, һалҡын аҡылға, иҫәп-хисапҡа ҡоролған ғаиләләр ҡайнар мөхәббәт нигеҙендә ҡоролғандарға ҡарағанда, күпкә тотороҡло.

Ығы-зығынан, башҡалар фекеренән арынып, тик үҙеңсә генә уйлан әле. Әгәр ҙә маҡсат йәшәр өсөн этәргес көс бирә икән, ул ни тиклем ваҡ булһа, кеше тормош ығы-зығыһында шул тиклем ваҡлыҡтарға күмелә. Шағир әйтмешләй, "Кеше тауға түгел, түңгәккә абына". Һин бит әле бер тапҡыр ҙа кейәүҙә булмағанһың, ә тәжрибә туплап, башҡаларҙы сағыштырып, һығымталар яһап маташаһың. Хатта шундай уй тыуып ҡуя: һин кейәүгә сығырға уйламайһың (бәлки, ҡурҡаһыңдыр), ә һине көсләп бирергә йыйыналар. Яңғыҙлыҡтан яңғыҙлыҡҡа ҡасып булмай. "Йәш күңел нимә өмөт иткәнен үҙе генә белә", тиһең. Әлбиттә, белә. Бына минеке минеңсә белә, һинеке - һинеңсә. Тик киреһенсә түгел. Күрәһең, әле һин күңел тауышын ишеткәнең юҡ. Уны ишетһәң, аҡыл-сафсата һатырға хәлең ҡалмаҫ ине. Иң алда күҙең томаланып, йөрәгең урынынан сығып, аҡылдан яҙыр инең. Бәлки, был тойғо һиндә булғандыр ҙа? Мөхәббәт килгәндә кеше ғаилә ҡороу тураһында онота хатта. Ғаилә тигән бәләкәй генә йәмғиәт шул мөхәббәт сәскәһен йә һулыта, йә ул емеш бирә.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ**
**яҙып алды.**

*✓ Яңы ойошма етәкселәре бөтә йәштәрҙең дә фекеренә ҡолаҡ һалыр, дөрөҫ ҡарарҙар сығарыуға өлгәшә һәм бөгөн тырым-тырағайыраҡ йөрөгән йәштәребеҙҙе берләштерә алыр, тигән ышаныс бар.*



ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ЙӘШТӘР ҠОРОЛТАЙЫ ОЙОШТОРОУ...

## күптән көтөлгән ваҡиға

**Сибай ҡалаһында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының "Башҡорт халҡы - Рәсәй именлеге һәм үҫеше өсөн" тип аталған төбәк-ара форумы булып уҙҙы. Форум сиктәрендә Бөтөн Рәсәй башҡорт йәштәренең беренсе съезы ла ойошторолдо.**

Республика ҡала-район ҡоролтайҙары рәйестәре йыйылған ултырышта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов 2015 йылдың 21 ноябрендә үткән IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң башҡарылған эштәрҙе барланы, Ҡоролтай эргәһендәге һөҙөмтәле эш алып барған 10 комиссияның эшмәкәрлеге тураһында һөйләне. Билдәләнеүенсә, бөгөн Ҡоролтайҙа ун комиссия эшләй, уларҙың ултырыштары даими үткәрелеп тора. Мәҫәлән, мәғлүмәт сәйәсәте мәсьәләләре буйынса комиссия ултырышында Ҡоролтайҙың үҙ баҫмаһын сығарыу тураһында ҡарар ҡабул ителгән. Июнь айынан башлап "Башҡортостан"ға ҡушымта булған "Ҡоролтай тауышы" тигән гәзит сыға башланы.

Артабан сығыш яһаусылар шулай уҡ бөгөн бик актуаль булған мәсьәләләр тураһында һөйләп үтте. Филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисамитдинова республикала башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса методистар институтының бөтөрөләүенә бәйле борсолоуын белдерҙе. "Ғөмүмән, туған телде һаҡлауҙы һәр беребеҙ үҙенән башлаһын ине, - тип өндәште ултырышта ҡатнашыусыларға Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы. - Бер генә һорау: балаларығыҙ башҡортса һөйләшәме?" Мәрйәм Бураҡаева тағы бер уйландырырлыҡ миҫал килтерҙе: "Ҡоролтай рәйесе Әмир Ишемғоловтың башҡорт бал ҡорттары тураһындағы сығышын тыңларға тура килгәйне. Башҡорт ҡорттары икенсе төр ҡорттар менән аралашҡанда тәүҙә уларға мул итеп бал бирә, һуңынан әкренләп үҙҙәре юғалыуға дусар була. Мин үҙебеҙҙе ошо башҡорт бал ҡорто кеүек күрәм, - тине әҙибә. - Юғарынан алып барылған сәйәсәтте, кире тенденцияны туҡтатып булмай, әммә уны диңгеҙҙә торғанда тулҡынды үткәргән кеүек үткәреп ебәрергә була. Тимәк, туған телде, милләт булараҡ башҡортто һаҡлау буйынса алып барған эштәрҙе ниндәй шарттарҙа ла тыныс ҡына дауам итә алабыҙ..."

"Глобалләшеү шарттарында нисек милләт булараҡ һаҡланып ҡалырға?- тигән һорау ҡуйҙы артабан сығыш яһаусы Башҡорт дәүләт университеты профессоры Ғәфүр Сәлихов. - Әлбиттә, миллилегебеҙҙе юғалтмайыҡ тип, донъянан йәшеренә алмайбыҙ. Радио-телевидение ғына түгел, һәр өйгә интернет кергән заман. Әммә беҙ ошо цивилизация алып килгән мөмкинлектәрҙе үҙебеҙҙең файҙаға ҡулланa алабыҙ ҙаһа..."

Ҡоролтай ултырышында дин мәсьәләһенә лә айырым иғтибар бирелде. Республикала рәсми рәүештә эшләп килгән дини берләшмәләр, ағыулы тырнағына эләктереү өсөн ялған мәғлүмәт таратҡан радикаль ағымдар тураһында Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт-конфессия мөнәсәбәттәре Советы рәйесенең кәңәшсеһе Руслан Ҡарамышев сығыш яһаны. Белгес әйтеүенсә, радикализм, экстремизмды таратыусылар уғата әүҙем. Уларҙың тоҙағына эләкмәҫ өсөн Руслан Ҡарамышев һәр осраҡта ла кеше күңелен дауалау менән шөғөлләнгән, махсус белеме булған дин әһелдәренә мөрәжәғәт итергә саҡырҙы.

Булып үткән ултырыштағы һөйләшеүҙәрҙең төп темаһы башлыса республикала һәм күрше өлкәләрҙә йәшәгән башҡорттарҙы әүҙемләштереү маҡсатында Ҡоролтайҙың көньяҡ, көнбайыш, төньяҡ, төньяҡ-көнсығыш, Урал аръяғы һәм үҙәк район-ара һәм төбәк-ара ҡоролтайҙар ойоштороуға ҡайтып ҡалды, уларҙың етәкселәре лә билдәләнде. Һәр төбәк өсөн махсус булдырылған Положениелар проекты тикшерелде. Урал аръяғы төбәк-ара башҡорттары ҡоролтайын Зиннур Йәрмөхәмәтов, төньяҡ-көнсығышты - Йәмил Мөхәррәмов, төньяҡ район-ара ҡоролтайын - Рәис Исмәғилев, көнбайыш район-ара төбәкте - Дилбәр Фәтхетдинова, көньяҡ төбәк-ара башҡорттары ҡоролтайын Таһир Искәндәров етәкләйәсәк, тип ҡарар ителде.

Ҡоролтай ултырышының икенсе өлөшө төп мәсьәләһе булып, әлбиттә, Бөтөн Рәсәй башҡорт йәштәре ҡоролтайын ойоштороу булды. "Яңы ойошманың маҡсаты - көнүҙәк мәсьәләләрҙе берлектә хәл итеү өсөн Ҡоролтай эргәһендә барлыҡ башҡорт йәштәре йәмәғәт ойошмаларын бергә туплау, - тине Әмир Ишемғолов. - Халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыу, республика күләмендәге эштәрҙе хәл итеү һәм тәү ҡарашҡа еңелдән булмаған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн берҙәм булырға кәрәк..." Яңы ойошманың уставын, положениеларын тикшергәндән һәм ҡабул иткәндән, төрлө тәҡдимдәр һәм сығыштарҙы тыңлағандан һуң, йәштәр ҡоролтайы рәйесе вазифаһына күпселек тауыш менән Ринат Рамаҙанов һайланды. Р. Рамаҙановты беҙ "Арғымаҡ" этно-төркөмө етәксеһе, зыялы һәм рухлы йәш кеше, матур ғаилә башлығы булараҡ беләбеҙ. Уның был эшкә ең һыҙғанып тотонорға теләге лә, һөйләгән телмәре лә күңелдәргә хуш килде. "Мин тиңдәштәремә, милләттәштәремә әллә ниндәй яңылыҡтар, асыштар тәҡдим итә алмайым, ә бары ата-бабаларыбыҙ кеүек тәбиғи тормош ҡанундарын тотоп, "Урал батыр" эпосы фәлсәфәһендәгесә, "тереһыу асылын аңлап", атайҙар - атайлыҡ, әсәйҙәр - әсәйлек вазифаларына яуаплы ҡарап, йолаларҙы, динде һәм, әлбиттә, бер-беребеҙҙе хөрмәт итеп йәшәргә саҡырам. Ә был йәшәйеш өсөн иһә беҙгә телле, ерле, хоҡуҡлы, һау-сәләмәт һәм көслө милләт булып һаҡланыу кәрәк".

Шулай итеп, Ринат Рамаҙанов етәкселегендәге аңлы һәм белемле йәштәр ҡулына шундай теҙгән тотторолоп, индәренә ҙур бурыстар һалынды. Аҡлармы улар халыҡ ышанысын - уныһын киләсәк һәм ваҡыт күрһәтер. Әлегә беҙ уларға бары тик уңыштар ғына теләйбеҙ. Йәштәр ҡоролтайына бәйле икенсе төрлө ҡараштар ҙа булды, был шулай булырға тейеш тә, һәр йәш кеше шәхси фекергә хоҡуҡлы. Яңы ойошма етәкселәре бөтә йәштәрҙең дә фекеренә ҡолаҡ һалыр, дөрөҫ ҡарарҙар сығарыуға өлгәшә һәм бөгөн тырым-тырағайыраҡ йөрөгән йәштәребеҙҙе берләштерә алыр, тигән ышаныс бар.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

**Айгөл ШӘРӘФЕТДИНОВА.**



БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Беренсе бүлек

### Евразияла йәшәүсе боронғо халыҡтарҙың этник тарихы

Беҙгә көнбайыш ғалимдарының башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары хаҡындағы яҙмалары айырыуса әһәмиәткә эйә. Аристей яҙмалары буйынса беҙгә билдәле булған халыҡтарға Геродот яҙмаларында тиссагеттар, аргиппейҙар һәм иирктар өҫтәлә, уларҙың һәр ҡайһыһы көнкүреш, шөғөл, ғөрөф-ғәҙәт, дин үҙенсәлеге менән башҡаларынан айырыла. "Скиф" тигән йыйылма төшөнсә эсендә Геродот Рифейҙән Яксартҡа тиклем күсеп йөрөүсе саҡтарҙы айырып күрһәткән (Дандомаев, 1977, 30-39-сы биттәр). Геродоттың был мәғлүмәтен Страбон хуплай. Уның 11-се "География" китабында яҙыуынса, б.э.т. V-VI быуаттарҙа объектив сәбәптәр буйынса саҡ-мәсәғүттәрҙең киң иле өс ҡәбиләгә бүленә. Уларҙың дахи-даи тигәндәре Александр Македонский менән Һиндостанға тиклем барып етә. Икенселәре, саҡ-рауҡалар б.э.т. II быуатта Кавказ артынан үтеп, Бактрияны яулай, ә өсөнсөләре Көньяҡ Урал алдына (Ырымбур менән Башҡортостан араһы) күсенеп, Геродот иҫкә алған тиссагеттар, иирктар, исседондар менән аралашып йәшәй (Генинг 1971, 44-54-се битттәр).

Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡайһы бер авторҙар саҡ ҡатын-ҡыҙҙарының бала сағында уң түштәрен көйҙөрөп, уның артабан үҫеүен туҡтатыуы хаҡында яҙа. Был осраҡта уларҙың барлыҡ көсө уң ҡулға һәм уң яурынға йыйыла икән. Саҡ ҡыҙҙары кейәүгә сыҡҡансы һыбай йөрөй (209, 110-сы бит). Ғалимдарҙың мәсәғүттәр хаҡындағы яҙмалары ла ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, Каспийҙың көнсығышында (Төньяҡ-көнбайыш Төркмәнстан), Ирандың төньяҡ сигенә күрше йәшәгән мәсәғүттәрҙә йыназа тәртиптәре Заосторизм ҡанундары буйынса башҡарыла (Вайнер, Йосопов, 1992, 123-125-се биттәр). Улар Аракс йылғаһы аръяғында исседондарға ҡаршы көнсығышта йәшәй. Ҡайһы берәүҙәр уларҙы скиф ҡәбиләләре тип һанай (Геродот, 75-76-сы биттәр). Н.Л. Членова яҙыуынса, "Күк йылғаһы" Гангты ирандар Аҡ йылғаға (Ағиҙел) тиңләгән. Һинд арийҙары Көньяҡ Урал тауҙарын да үҙҙәрендәге тауҙарға параллель итеп ҡуйған (Совет археологияһы,1989, №2, 228-се бит). Ғалимдар фекеренсә, "Шахнамә"лә яҙылған берзула ҡәбиләһе боронғо мәсәғүттәрҙең тур һәм алан тармағына ҡарай, берзулалар ҙа улар менән бер тамырҙан. И.В. Пьянков та шул фекерҙе яҡлай : мәсәғүттәр турҙар ("тига"лар) барлыҡҡа килтергән ҡәбилә берләшмәләре менән бер тамырҙан (И.В. Пьянков., 1975, № 2, 68-се бит). Шулай итеп, Авеста Туралары грек сығанаҡтарындағы мәсәғүттәргә тап килә (207, 16, 20-22-се биттәр). Күп кенә комментаторҙар, Геродоттың әйткәндәренә таянып, исседондарҙы Уралдың көнсығышында Исәт йылғаһы буйында йәшәгән тип иҫәпләй (Доватур һәм башҡалар., 1982, 253-сө бит). Б.э.т. V быуатта Геродот "Бейек Рифей тауҙары итәгендә кешеләр йәшәй. Ул халыҡтың атамаһы - аргиппейҙар" тип яҙып ҡалдырған. С.Я. Лурье уларҙы хәҙерге башҡорттарҙың ата-бабалары тип иҫәпләй. Ә Страбондың "География" тигән хеҙмәтендә был ерҙәр "ургалар иле" тип атала, "ургалар күсмә тормош менән йәшәй, уларҙың бер аҙы игенселек менән шөғөлләнә". Профессор С.Л. Утченко бында Страбондың урга тип әйткәнен, уғраны күҙ уңында тота, тип белдерә (80, 5-се бит). Авторҙарҙың был сығанаҡтарынан беҙ шуны ла аңлайбыҙ: боронғо Рифей (Уралтау) тауҙарында урындағы уғыр ҡәбиләләре көнсығыштан көнбайышҡа, төньяҡтан көньяҡҡа күсенеүсе күп һандағы ҡәбиләләр менән тығыҙ аралашып йәшәгән. Борон заманда Урал, шулай уҡ барлыҡ Көнсығыш Европа көнбайышҡа табан күсенеүсе халыҡтар өсөн "бөйөк ҡапҡа" булып хеҙмәт иткән. Көньяҡ Уралда һәм Волга буйында б.э.т. VI-V быуатта ултыраҡ тормош менән йәшәүсе Европа халыҡтарының йәшәгән урындары табылған. Улар үҙҙәрен уғырҙар (башҡорттарҙың ата-бабалары - Й.Б.) тип атап йөрөткән.

**(Дауамы бар).**

✓ *Польшала йәшәүсе дуҫыма ҡунаҡҡа барғайным, ундағы бер нәшриәткә һүрәттәремде күрһәтергә булдым. Улар миңә эш тәҡдим итте. Ҡабул иттем һәм ике йылдан һуң ғаиләмде алып, Бельско-Бялаға күстем.*



# МИН ПОЛЬШАЛА ЛА,
## мин бөтөн ерҙә лә

**Бөгөн беҙ гәзит уҡыусы иғтибарына билдәле иллюстратор, аниматор Азат ҠУЖИН менән әңгәмә тәҡдим итмәксебеҙ. Геройыбыҙҙы республикала, хатта сит илдәрҙә нәшриәт эше менән бәйле кешеләр яҡшы белә. Ул оҙаҡ йылдар З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте менән дә, Европа нәшриәттәре менән дә хеҙмәттәшлек итә. Бынан тыш, Азат Ғәлиәскәр улы "Любизар" Беренсе башҡорт атлы полкы (элекке - "Төньяҡ амурҙары"), "Амантай" ижад үҙәге менән тығыҙ эшләй. "Любизар"ҙар рәтендә төрлө сараларҙа башҡорт яугирҙары сүрәтендә сығыш яһай. Оҙаҡ йылдар Польшала йәшәгән милләттәшебеҙгә үҙебеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек. Әйҙәгеҙ, һүҙҙе уның үҙенә бирәйек.**

**▸ Байтаҡ башҡорт китаптарында "рәссам-биҙәүсеһе Азат Ҡужин" тигән яҙыуға төртөлгән бар. Үҙегеҙ менән нығыраҡ таныштырып үтһәгеҙсе...**

- Мин 1962 йылда Өфөлә тыуғанмын. 20-се мәктәптә уҡыным, 2-се һынлы сәнғәт мәктәбендә шөғөлләндем. Өфө Нефть институтының архитектура бүлегендә юғары белем алдым. Унан, йәш хеҙмәткәрҙәр булараҡ, йүнәлтмә менән Сибай ҡалаһы башҡарма комитетының Архитектура бүлегендә, Сибай балалар һынлы сәнғәт мәктәбендә эшләнем. 90-сы йылдарҙа Өфөлә, үҙнәшер ысулы менән "Төньяҡ Америка индеецтары", "Төньяҡ амурҙары" исемле тәүге китаптарымды нәшер итеүгә өлгәштем. 1990 йылда Польшала йәшәүсе дуҫыма ҡунаҡҡа барғайным, ундағы бер нәшриәткә һүрәттәремде күрһәтергә булдым. Улар миңә эш тәҡдим итте. Ҡабул иттем һәм ике йылдан һуң ғаиләмде алып, Польшаның анимациялар "баш ҡалаһы"- Бельско-Бялаға күстем. Бик мауыҡтырғыс, тынғыһыҙ эш башланды. Нобель премияһы лауреаты Х.Сенкевичтың киң билдәле триптихын ("Огнем и мечом", "Потоп", "Пан Володыевский") һәм "Крестоносцы" китаптарын биҙәүҙе миңә ышанып тапшырҙылар. Уныштарымды күреп, бик күптәр шәхси күргәҙмәмде ойошторорға тәҡдим итте. "Юҡ, ваҡыт юҡ", тип баш тарта килдем. Поляктарҙың күңел киңлеге, ябайлығы һоҡландырҙы.

**▸ Польшала йәшәп китеү, эшкә урынлашыу ауыр булдымы?**

- Закон буйынса ҡарағанда, сит ил кешеһен эшкә алыр алдынан эш биреүсе тәүҙә иғлан баҫтырырға тейеш. 10 кешене ҡарап, улар араһында ошо эшкә тап килгән лайыҡлы дәғүәсе табылмаған хәлдә генә ул сит ил кешеһен эшкә ала ала. Һәр хәлдә, ул йылдарҙа эшкә урынлашыу процедураһы ошолай ине. Икенсе төрлө әйткәндә, унда эшләү өсөн һин поляктарҙан кәмендә 4 тапҡырға шәберәк, яҡшыраҡ эшләргә тейешһең. Яҡшы белемле рәсәйле өсөн европалыларҙан шәберәк эшләү бөтөнләй ауыр түгел. Беҙҙең Өфө архитектура мәктәбе - бик алдынғы, шәп мәктәп. Беҙҙең академик һүрәт менән европалыларҙың һүрәте араһында айырма - Ер менән күк араһы. Бер мәл етәксем миңә: "Азат, һин ныҡ тиҙ эшләйһең, башҡалар өлгөрмәһә, уларҙы тәнҡитләйһең, етмәһә. Һинең менән бер кемдең дә эшләгеһе килмәй бит әле", - тип әйтеп һалды. Мин: "Ярай, улайһа...", - тинем дә, ул эштән киттем дә барҙым... Бер йылдан һуң ни күрәм: хеҙмәттәштәрем бүләктәр, һый тотоп, йүгереп килеп еткәндәр: "Азат, кире кил инде, беҙ бары тик һинең менән генә эшләргә ризабыҙ, башҡа бер кем дә кәрәкмәй. Ҡалғандарға көнөбөҙ ҡалғайны, улар бишәүләп бер китапты тамамлай алмай аҙаплана, ҡайһыһына илһам кәрәк, берәүҙең ваҡыты юҡ..." - тиҙәр...

Ғөмүмән, техник белемле иллюстратор булараҡ, мин поляктарҙың күп кенә хаталарын күреп, элеп ала торған холҡом бар (техник белемем ижади ҡарашҡа ҡамасаулап та ҡуя, әммә, алтын урталыҡты тапһаң, ундай тәжрибә багажы менән дә эшләп була). Әйтәйек, нәшриәттә баҫмаға әҙерләнеп ятҡан китаптарҙың береһендә өй һүрәте аҫтына: "Был - ҡояш йылылығы ярҙамында барлыҡҡа килтерелгән электр менән файҙаланған өй", - тип яҙып ҡуйылған. Ә өйҙөң әлеге ҡояштан көс йыя торған батареялары, көньяҡ урынына, көнбайыш менән көнсығышҡа ҡаратып төшөрөлгән. Тағы... Математика дәреслегендә бер мәсьәләлә караптың ярҙан ниндәй алыҫлыҡта ултырыуын һанап сығарырға ҡушылған. Мин һанап ҡарағайным, яуап 3 см килеп сыға. "Карап ярға ул тиклем яҡын килә алмай", - тип, тағы аңлатырға тура килде. Бындай миҫалдарҙы әллә күпме килтерергә булыр ине, әлбиттә. Йәғни, әгәр һинең мәктәбең яҡшы икән һәм уға өҫтәп һин үҙ өҫтөңдә эшләйһең икән, теләгең булһа, Европала эшкә урынлашып була, тимәксемен.

**▸ Польшалағы халыҡ менән беҙҙәге халыҡ араһында айырма күҙгә ташланамы? Бәлки, иҡтисади йәһәттән айырма һиҙеләлер...**

- Иҡтисади айырма юҡ кимәлендә. Быға тиклем Сибайҙа, Өфөлә эшләгәнемдә лә аҡсаға артыҡ мулыҡманым, Польшала ла "ҡайышты һыҡтырыбыраҡ" йәшәргә тура килде. Польшаға барып төшөү менән мәҙәни тетрәнеү кисерҙем былай. Уларҙа эшкә мөнәсәбәт бөтөнләй икенсе. Унда нәшриәттә ни бары ике генә кеше эшләргә лә мөмкин. Ә беҙҙә... Ниндәй генә бүлектәр юҡ. Береһенә инһәң, улары гәп һата, икенсе бүлегендә - төшкө аш. Польшала "төшкө аш" тигән күренеш бөтөнләй юҡ. Беҙҙә төшкө аш мәлендә берәй кибеткә барһаң, ул ябыҡ була. Көнбайышта "төшкө аш мәлендә беҙгә кил", тип саҡырып торалар. Ә Рәсәйҙә ундай күренеш һирәк. Төшкө аш мәлендә йомошоңдо йомошлайым, тип, берәйһенә мөрәжәғәт итеп ҡара - әрләнеп тә сығаһың әле. Польшала банкта булһынмы, йәки башҡа урындамы - сират тигән нәмәне күргәнем юҡ.

Бер иптәштең: "Рәсәйҙә һинең ҡаршыңа килгән кеше мотлаҡ һиңә берҙе тондорасаҡ йәки шәхес тураһында таныҡлығыңды һораясаҡ", - тигәне дөрөҫ, минеңсә. Тегендә - бындай нәмә юҡ. Йәшә лә йәшә. Миңә шуныһы оҡшай. Шулай ҙа, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, мин унда Рәсәйҙе һағынып бер булам. Әммә Рәсәйгә ҡайтһам, ярты йылда бындағы көсөргәнештән арыйым.

Мин төндә эшләргә яратам. Әммә бында төн буйы урамда иҫеректәр тантана итә: һуғыша, йырлаша, ҡысҡырыша... Йә уларҙы полиция алып китә, йә - тиҙ ярҙам машинаһы. Арыта. Тегендә мин ял итәм: иҫеректәрҙе түгел, тиҙ ярҙам машинаһын да, полицияны ла күрмәйем, тиерлек. Ярты йыл "ял итһәм", тағы ялҡыта. Рәсәй кешеһе бит инде мин: "Ниндәй һаҙлыҡ был, бер нәмә лә эшләнмәй", - тип, тағы Башҡортостаныма ҡайтам.



***АЗАТ ҠУЖИН:***

Польшала үҙемдең башҡорт кешеһе булыуымды белгертеп йөрөйөм. Сараларға Башҡортостан флагын тотоп сығам Унда мине башҡорт тип беләләр.

Барыһы ла мине Польшала йәшәй икән, тип уйлай. Был төптә дөрөҫ түгел. Мин Польшала ла, Өфөлә лә йәшәйем. Мин бөтөн ерҙә лә йәшәйем. Ҡайҙа барам - мин шунда йәшәйем. Ҡайҙа төн уҙғарыуым мөһим түгел. Шулай ҙа, Ватан мәсьәләһенә килгәндә, икеләнеү тураһында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел... Мин Польшала үҙемдең башҡорт кешеһе булыуымды белгертеп йөрөйөм. Сараларға Башҡортостан флагын тотоп сығам Унда мине башҡорт тип беләләр.

2000 йылдар баштарында аниматорҙар курсы үттем һәм Польша, Германия, Франция, АҠШ һәм башҡа илдәрҙә төшөрөлгән тулы метражлы анимацион фильмдар, йәғни йәнһүрәттәр өҫтөндә эш башланым. Шул уҡ ваҡытта, рәссам һәм дизайнер булараҡ, Рәсәй һәм Польша нәшриәттәре менән хеҙмәттәшлекте лә туктатманым. Мин әллә күпме эштә эшләнем. Анимация студияһында ла, нәшриәттәрҙә лә, бер типографияның нәшриәт бүлегендә лә. Хәҙер өйҙә ултырып ҡына эшләйем. Интернет аша эш һайлайым да, эшләй башлайым. Йәғни, фрилансермын. Хәҙер "Китап" нәшриәте менән дә, башҡа нәшриәттәр менән дә интернет аша аралашабыҙ. Уңайлы ла, тиҙ ҙә... Әгәр сымдарҙың теге яҡ осонда үҙ эшен белгән

*✓ Экзюпери әйтмешләй, кеше менән шәхсән аралашып, донъяны - сит мәҙәниәттәрҙе, кешеләрҙе асыуҙан да яҡшырағы юҡ. Мин, мәҡәлдә әйтелгәненсә, мең тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр күреү яҡлы.*







профессионал ултыра икән, ул ниндәй генә телдә һөйләшмәһен - беҙ бер-беребеҙҙе аңлайбыҙ. Әгәр ҙә инде ялҡау, үҙ эшен белмәгән бер йүнһеҙ кеше ултырһа, ул хатта үҙ телендә һөйләшһен - эш барып сыҡмай.

**▶ Ә ни өсөн Рәсәй кешеһе Европа кешеһе һымаҡ эшләмәй?**

- Польшала социализм ҡоролошо ваҡытында ла халыҡтан ергә аҫабалыҡ хоҡуғы тартып алынмаған. Шуға ла улар "минеке" тигән принцип менән йәшәй. Мәҫәлән, Польшала урамдың йәмен боҙоп ятҡан күләүекте кешеләр, тупраҡ ташып, киптерергә тырыша, "Кеше күрһә, оят", "Күрше алдында уңайһыҙ", ти улар. Ә беҙҙә ошондай уҡ хәл осрағында: "Минеке түгел дә инде, ята бирһен", - тиҙәр. Алдараҡ әйтелгән төшкө аш ваҡытында кешене хеҙмәтләндереү-хеҙмәтләндермәүгә, эргә-тирәнде тәртиптә тотоу-тотмауға ҡарата шуны ғына әйтә алам: барыһына ла тормош үҙе өйрәтә.

**▶ Ә Башҡортостанда ат үрсетеү мәсьәләһе Европала нисек ҡуйылған?**

- Башҡортостанда йылҡы күп, ә аттар аҙ. Илдар Шәйәхмәтов һеҙҙең гәзиттә был турала аңлатып үткәйне инде: "Тәбиғи рефлекстары менән генә түл йыйып, көрәйеп, иркенлектә генә йәшәгән мал ул - йылҡы. Һарайында ите өсөн генә йылҡы һимертеүсе хужа, тимәк, атай-олатайҙар йолаһынан ситләшеп, тик ит ашап ятыусы ғына. Беҙҙең бурыс - һәр ҡолондо ат рәүешенә еткереү. Европала үҙҙәренең ат һарайҙары булған эшҡыуарҙар бихисап. Береһе ҡуртымға атын бирә, икенсеһе - ат һарайҙарын..."

Швецияға барып ҡайтҡан бер поляк менән әңгәмәләшеп торғайныҡ.

- Шведтар хоккей уйнарға ярата, хоккей нисек унда? - тип һорауыма ул: - Унда ниндәй хоккей булһын? Улар күмәкләшеп һыбай йөрөп ята ла инде. Һыбайлылар хәрәкәте ныҡ үҫешкән. Шведтарҙың утарҙарында реакреация, иппотерапия (аттар ярҙамында дауалау) аҙым һайын...- тине.

Әле мин һөйләгәндәрҙән: "Европала шарттар уңайлы, шуға эшенде асыуы еңел",- тигән һығымта яһаусылар табылыр. Еңел үк түгел шул, тип әйтеп ҡуйырға ашығам. Яңылыш аңламағыҙ берүк. Мәсьәләләр ҡайҙа ла бар инде ул.

**▶ Уҡ-һаҙаҡ менән ҡыҙыҡһыныуығыҙ ҡасан, ниҙән башланды?**

- Хәрби-тарихи реконструкцияларҙан. Башҡорт яугиры булып сығыш яһайһың икән, һинең уҡ-һаҙағың мотлаҡ булырға тейеш. Беҙ Рафаэль Амантаев менән бергә эшләйбеҙ. Мин буласаҡ ижад емешенең һыҙмаһын ҡағыҙға төшөрәм, ә ул уны эшләп ҡуя. Тәүҙә Рафаэль Амантай йәйәләрҙе сәхнә өсөн генә эшләй ине. Әкренләп Ғәлинур Зарипов менән ысын уҡ-һаҙаҡ эшләргә өйрәнделәр. Бик ауыр, оҙаҡ өйрәнелә торған шөғөл ул - уҡ-һаҙаҡ эшләү. Уҡ-янды һатып алырға ла була. Ҡаҙағстанда уларҙы беҙҙең дуҫтар эшләй. Венгрия, Корея традицион уҡ-һаҙағын интернеттан да һатып алырға була. Мәҫәлән, һыбай килеш уҡ атыу өсөн 200 долларға ыҡсым Корея уҡ-һаҙағын ыһ та итмәй һатып алырға мөмкин. Мин әле өсөнсө ҡоралымды тотоп йөрөйөм. Таушалып тора, алыштырып торам. Бынан ары тик башҡорт оҫталары ғына етештергән уҡ-һаҙаҡ менән йөрөрмөн, Рафаэлдың йә Ғәлинурҙың ҡоралын алырмын, тим.

**▶ "Төньяҡ амурҙары" клубына нисек ылығып киттегеҙ?**

- Уның элекке етәксеһе Исҡужин менән күптән хеҙмәттәшлек итә инем. Исҡужин менән "Төньяҡ амурҙары" исемле минең тәүге китабымды нәшер иттек. Ул китап АҠШ Конгресы китапханаһында ла бар, тиҙәр. Илдар Шәйәхмәтов менән иһә Әбйәлил районында уҙғарылған бер сарала таныштыҡ. Һөҙөмтәлә уның энтузиазмы менән ошондай эштәр атҡарырлыҡ көслө коллектив тупланды. Рафаэль Амантай, оҫта бейеүсе булыуҙан тыш, оҫта һөнәрсе лә. Ул бик ярҙамсыл кеше. "Французлар" ярата үҙен. Ул күренеү менән, тегеләр: "О, башҡорттар килде! Хәҙер улар беҙҙең ҡорал-ярағыбыҙҙы, эйәр-өпсөндө төҙәтеп, йүнәтеп бирәсәк", - тип, һырып алалар. Ул көндән аяҡ кейемдәре тегә, клубты баштан-аяҡ кейендерә. Кейемдәрҙең проектын мин һыҙам тип әйткәйнем инде. Мин - Польшала, Рафаэль Өфөлә саҡта ла бер төптән эшләйбеҙ. Сөнки беҙҙе берләштерер идея, башҡорт рухыбыҙ бар. Кинорежиссер, милләттәшебеҙ Нәсүр Йөрөшбаев менән Лейпцигта ла, бында ла көрәшәбеҙ... Әйткәндәй, Өфөлә йәшәүсе кешеләр бер-береһе менән беҙгә ҡарағанда ла һирәгерәк осраша. Беҙ, төрлөбөҙ төрлө илдә булһаҡ та, йышыраҡ күрешәбеҙ һымаҡ.

**▶ Һеҙҙәге рухтың сығанағы нимәлә?**

- Ген кимәлендәлер ул, тип фаразлайым. Әлбиттә, тәрбиә лә мөһим урын биләй: рухлы ата-әсә ҡулында тәрбиәләндем.

**▶ Ғаиләгеҙ менән дә таныштырһағыҙсы...**

- Ҡатыным менән ике ул тәрбиәләйбеҙ. Өлкән улыбыҙ Искәндәр - электронсы, Таһир - төҙөүсе. Әйткәндәй, Искәндәр бер Америка фирмаһында Башҡортостан ойошмаларына компьютер аша программалар ҡуйырға ярҙам итә. Йәғни, уның эше - Башҡортостанға ярҙам итеүҙән ғибәрәт.

Таһир минең менән бергә поляк балаларына башҡорттар тураһында лекциялар уҡый. Әйтәйек, яңыраҡ бер балалар баҡсаһына милли кейемдә барып ингәйнек, балалар беҙҙең "сәйер" кейемдәрҙән ҡурҡып, илап ебәрмәһенме... Был да ген хәтере, ахыры, тип, көлөп алам.

# ӨФӨЛӘ ЛӘ ЙӘШӘЙЕМ...

**йәшәйем**









А. Ҡужин һүрәттәре.

Кәрәк икән, хәҡиҡәтте бер минут эсендә лә һеңдерә. Тимәк, Рәсәйҙә әлегә Европалағы һымаҡ итеп эшләү өсөн сәбәптәр аҙ. Шул уҡ конкурентлыҡ аҙ булыуы ла был ҡаҙанға үҙ өлөшөн индермәй ҡалмай, әлбиттә. Шулай уҡ уларҙа закондар яҡшы эшләй. Мәҫәлән, ҡайҙалыр уҡығайным: бер ҡатын, ниндәйҙер магазин эргәһенән үтеп барышлай, туфлиенең үксәһен юлдағы ярыҡҡа ҡыҫтырып, аяғын ҡаймыҡтыра. Һәм үҙенең биләмәһендә бындай хәлгә сик ҡуйғаны, юлды тәртиптә тотмағаны өсөн магазин ҙур ғына штраф түләргә мәжбүр була. Бынан ары ул урында берәү ҙә аяғын ауырттырмаған. Ҡыйыҡтарҙы боҙбармаҡтарҙан таҙартыу эше лә һәр ойошманың үҙенә йөкмәтелә...

Мине поляктарҙың эшлеклелеге лә хайран итә. Бер ыңғай бер нисә эштә эшләүселәр күп. Бер танышым хатта юл төҙөүсе булһа ла, икенсе эштә эшләргә көс таба. Аптырарһың. Ә беҙҙә, Өфөлә, ике эштә эшләүсе таныштарым бөтөнләй юҡ.

Башлаған һүҙҙе дауам итеп, тағы шуны әйтке килә: поляктарҙың эште ойоштора белеүенең сере уларҙың ойошҡан булыуында ла түгел, ә тәжрибәле булыуындалыр. Әлбиттә, барыһы ла улай уҡ ябай түгел. Халыҡтың үҙенсәлеген генә түгел, ә уның барлыҡҡа килеүенә йоғонто яһаған тарихи, гео-сәйәси процестарҙы, дини ғәҙәттәрҙе лә күҙ уңында тотоу кәрәк бында.

**▶ Азат Ғәлиәскәр улы, "Мәргән уҡсы" фестивалендә һеҙ халҡыбыҙҙың һыбай уҡ атыу төрөн үҫтерергә кәрәклеген әйткәйнегеҙ. Аттар**

Польшаға кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Краковта йәшәүсе бер танышым көн дә таңғы алтыла ат һарайына бара, атына атланып, уҡ атыу күнекмәһе үтә. Был шөғөл менән ул ун йыл буйы йыл әйләнәһенә, көн боҙолған, тип тормай шөғөлләнһә лә, ярыштарҙа беренсе урын ала алмай. Бына ниндәй кимәл! Йәки тағы бер танышым нисә тапҡыр чемпион булғандыр - һанағаным да юҡ. Уның да үҙенең ат һарайы бар. Атта һыбай йөрөү спорты менән 9 йәшлек сағында шөғөлләнә башлаған. Әле һанап киткән кешеләр - һыбай килеш уҡ атыу менән генә "йәшәй". Уларҙың эше лә - шуға бәйле. Улар уҡсылар әҙерләү курстары ойоштора, бөтөн донъянан уҡыусылар ҡабул итә. Шундай уҡыусыларҙың береһен - Ирандан килгән егетте мин дә беләм. Иранлының 6 аты бар. Ул бында уҡып ҡайтасаҡ та, 6 атын уҡ атыуҙа ҡатнашырға өйрәтеп, уҡ атыу спортын үҙҙәрендә үҫтерә башлаясаҡ икәнлеге шикһеҙ. Тағы бер швед егете тураһында ла алдағы һөйләшеүҙә әйтә биреп ҡуйғайным. Ул өс йәй һыбай йөрөп, уҡтан атып, оҫталыҡ дәрестәре алды ла, Швецияға ҡайтты. Уның мәктәбе Швецияла иң яҡшыларҙан һанала.

Поляктар Башҡортостанға солоҡсолоҡҡа өйрәнергә килә. Башҡорттарға иһә, һыбай килеш уҡ атыу серҙәрен Польшаға барып өйрәнергә кәрәк. Европала мал һанаулы, иҫәпле. Шуға ла улар малдарын күҙ менән ҡаш араһында тота, беҙҙәге һымаҡ иркенлеккә сығарып ебәрмәй. Һәр һарығына чип ҡуйған бер танышым бар.

Бөтөн донъя интернет селтәре ярҙамында тоташҡан булыуы арҡаһында, мин бөгөн үҙемдең теләһә ҡайһы ҙурлыҡтағы һүрәттәремде бер секунд эсендә донъяның теләһә ҡайһы тарафына ебәрә алам. Инде 10 йыл интернет аша эшләйем, шунлыҡтан, ҡайҙалыр юлланыу мәсьәләһе юҡ. Экзюпери әйтмешләй, кеше менән шәхсән аралашып, донъяны - сит мәҙәниәттәрҙе, кешеләрҙе асыуҙан да яҡшырағы юҡ. Мин, мәҡәлдә әйтелгәненсә, мең тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр күреү яҡлы. Шуға ла мин йә бында, йә тегендә, йә башҡа ерҙә йәшәйем, шунда уҡ эшләйем дә. Гәзит уҡыусыларға һәм һиңә, Илгиз, телдәр өйрәнергә, донъяны үҙеңсә асырға кәңәш итәм. Барығыҙға ла - уңыштар!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо һөйләшеүҙән һуң төшкө ашҡа һуңлабыраҡ ҡайттым да, ғәҙәттәгенән иртәрәк кире эшкә йүгерҙем. Азат Ғәлиәскәр улының, поляктарҙа эшкә мөнәсәбәт шул тиклем етди, уларҙа "төшкө аш" тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ, тигән һүҙе шулай тәьҫир иткәндер. Һеңдерерлек, мауыҡтырғыс итеп һөйләй белә шул Азат ағай. Хас та рәсем төшөрә: барыһы ла күҙ алдына килеп кенә тора. Уның әңгәмәһе һеҙҙең күңелдәргә лә хуш килгәндер, тигән ышаныста ҡалам. Һүҙемдең аҙағында тағы бер генә күҙәтеүем менән бүлешмәй булдыра алмайым. Азат Ғәлиәскәр улы беҙгә асыҡтан-асыҡ әйтмәһә лә, заман технологияларын уңышлы ҡулланыу серен өйрәтә бит. Интернет ғәли йәнәптәрен дөрөҫ файҙаланыу үҙ эшенең оҫтаһын донъя кимәлендәге оҫта итә ала, тимәк.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Майор... ирем командировкала. - Шулай тине лә затлы тиренән тегелгән теге бәләкәй сумкаһын асып, игәлгән, буялған осло тырнаҡлы нәфис бармаҡтарына эләктереп, һаламдай нәҙек, оҙон сигарет сығарып ҡапты.**



Ысынлап та ул һылыу ине: балериналарҙыҡына тартым һығылмалы буй-һын, ҡыйғас ҡаштар аҫтынан ҡараған төпһөҙ күлдәй ҙур һоро күҙҙәр. Тик битлекте хәтерләткән камил йөҙҙә ниндәй ҙә булһа хис әҫәре тойолмай. Аҡ мәрмәрҙән ҡатын-ҡыҙ һынын юнып, үҙ ижадына үҙе мөкиббән китеп табынған, ғашиҡ булған боронғо грек легендаһындағы Пигмалион һәм уның балбалдан тере йәнгә әүерелгән сибәрҙәрҙән-сибәр Галатеяһы күҙ алдыма килеп баҫҡас, күңелемдә таныш шиғыр юлдары яңғыраны:

"... Мин дә һиңә һуңғы мөхәббәтем,
Пигмалион булып табынам..."

- Шулай итеп...

- Нимә әйтергә теләгәнегеҙҙе аңлап еткермәнем?

- Һеҙ - сержант мәктәбенең старшинаһы. Клубта минең артымда ултыраһығыҙ. Кис буйы ҡарашығыҙҙы алмай күҙләгән майор Слуквиндың ҡатынын, моғайын да, сырамытҡанһығыҙҙыр, танығанһығыҙҙыр?

Ошоғаса уғрылыҡ менән шөғөлләнеп тә әле генә килеп бурлыҡ өҫтөндә тотолған ҡараҡ хәлендә ҡалһам да бирешмәҫкә тырыштым:

- Танының.

- " Бетховендың "Айлы сонатаһы", Бахтың кантаталары оҡшанымы? - Ҡыйғас ҡаштар аҫтынан һынап ҡараған матур күҙҙәр осҡонланып янып киттеләр.

- Оҡшаны. Бигерәк тә Шопен әҫәрҙәре.

- Улайһа, беҙҙең ҡабул итеүҙәребеҙ тап килә. Мин дә бала саҡта махсус музыка мәктәбендә шөғөлләндем. Сығарылыш мәлендә диплом эше итеп Фредерик Шопенды һайлағайным. Фортепьянола уның бөгөн филармонияла яңғыраған "Ямғыр вальсы"н башҡарҙым. Тыңлаусыларҙың аяғүрә баҫып алҡышлауҙары әле лә ҡолағымда яңғырап торғандай. Һинән шәп пианистка сығасаҡ, тип маҡтанылар, ә мин икенсе, күңелемә яҡын һөнәрҙе һайланым. Ә Шопенға килгәндә, ул гениаль, виртуоз композитор, ҡыҫҡа ғына ғүмерендә әллә күпме үлемһеҙ әҫәрҙәр ижад итеп өлгөргән. - Ҡатын, уңайһыҙланғандай, ҡапыл туҡтап ҡалды. - Нишләп ул хаҡта оҙон-оҙаҡ һөйләйем әле?

- Тыңлайым бит. - Йөҙөмә ҡыҙыҡһыныу, ғәм һыҙаттарын өҫтәнем.

- Ысынлапмы? - Сабый балалай ышанып ҡараны.

- Ысынлап. - Әңгәмәне үҙемә ҡулай яҡҡа ҡайырҙым. - Ял көнө булһа ла һеҙ нишләптер бер үҙегеҙ генә.

- Хәрбиҙәрҙең ҡатындары күп осраҡта яңғыҙлыҡҡа дусар ителгәндәр. Беҙ ошо яҙмышҡа өйрәнергә, күнергә мәжбүрбеҙ. Фатирҙа йәнемә толҡа тапмай, ҡала буйлап йөрөп әйләнәйем, тип сыҡҡайным, көтмәгәндә шәп концертҡа юлыҡтым. Хәйер, Павел өйҙә булған хәлдә лә был тамашаға килмәҫ ине, беҙҙең ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ, ынтылыштарыбыҙ тап килмәй, ул башкөллө хәрби кеше.

- Мин дә бөгөнгө көнөмдө алдан планлаштырмағайным. Увольнениеға ла сиратым еткәнгә генә сыҡҡайным. Кемдең ирektә ял иткеһе килмәһен.

- Кеше бер ваҡытта ла ирекле, йәшәйеш ваҡлыҡтарынан тулыһынса азат була алмай. Ул һәр саҡ тормошон сикләүсе закондар уйлап сығара, үҙенән үҙе ҡаса. Саф алтындан ҡойолған ситлеккә бикләнгән ҡош үҙен бәхетле итеп тоя аламы?

- Тышҡы ҡоршауҙарға ҡарағанда, күңел ирке мөһимерәк, минеңсә.

- Килешәм. Һеҙҙе һирәктәр өсөн ойошторолған сарала осратырмын тип уйламағайным да.

- Яҡшы ял иттек бит һәм бына уйламағанда тап килештек.

- Осраҡлыҡҡа ышанмайым, тимәк, шулай булырға тейеш булған. Музыкаль белемлеһегеҙме әллә?

- Юҡ, мин һәүәҫкәр тыңлаусы ғына.

- Улайһа, әйтегеҙ әле, һәүәҫкәр тыңлаусы, һеҙгә концерттың ҡайһы яғы оҡшаны инде? - Сәнғәттән алыҫ икәнлегемде ишеткәс, наҙанлығыма иҫәп тотоп төпсөнәләр.

- Үткән йыл үтешләй Мәскәүҙең Ҙур театрында балет ҡарағайным. Ысынын ғына әйткәндә, унан бер нәмә аңламай килеп сыҡтым. Бындай инструменталь әҫәрҙәрҙе лә тәүләп тыңлауым. Оҡшау-оҡшамауға килгәндә, шишмә сылтырауын, ел иҫеүен, япраҡтар ҡыштырҙауын, төпһөҙ күк зәңгәрлеген, тәбиғәт йөҙөнә һалынған һағышлы көҙ биҙәген ҡайһы саҡ һүҙ менән генә төшөндөрөү мөмкин түгел, уларҙы йәнең менән, булмышың менән тойорға һәм ҡабул итергә кәрәк.

Ҡыйғас ҡаштар юғары сөйөлдөләр:

- Килешле итеп әйттегеҙ! Һеҙ, улайһа, әҙәбиәткә яҡындыр?

- Был йүнәлештә лә һәүәҫкәрмен.

- Ә мин, ғөмүмән, һәүәҫкәрлекте ҡабул итмәйем. Һәр эш юғары кимәлдә башҡарылып, һөнәри талаптарға яуап бирһен, шул саҡта ғына ул матур, ылыҡтырғыс була.

- Үҙешмәкәр Кулибин донъя кимәлендә билдәле әллә күпме һөнәрселәрҙе үҙенең уникаль асыштары менән шаҡ ҡатырған түгелме?

- Ундайҙар һирәк, бик һирәк, бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

Әңгәмә өҙөлдө. Ҡатын керпек уҡтарын эргәләге сирень ҡыуағына ҡунған ике ҡарабаш турғайға йүнәлтте, мин дә ҡоштарҙы ҡыҙыҡһынып күҙәтә башланым. Ҙурыраҡ кәүҙәлеһе ҡупшыҡайына сәтләүек ҙурлыҡ башын терәп-терәп ала, суҡышы менән тырпайынҡыраған йөндәрҙе һыйпай, рәткә килтерә. "Ошонан аҙаҡ ҡоштарҙы аңһыҙ, хисһеҙ тип әйтеп ҡара инде..."

- Осенняя пора, очей очарованье,
Приятна мне твоя прощальная краса...

- Тапалған, теңкәгә тейеп бөткән юлдар, сөнки улар күп тапҡыр ҡабатланған! - Помада яғылған уймаҡ ирендәр, ҡымтылып, һылыу йөҙ ризаһыҙ сирылды.

- Үҙемдең бөтөнләй үк томана түгеллегемде иҫбатламаҡсы ғына инем, юғиһә, һәүәҫкәр ҙә һәүәҫкәр.

- Ун өсөнсө рәттән килгән моңһоу ҡараштан хисле икәнлегегеҙҙе һиҙеп өлгөргәйнем инде. Залға килеп инәм дә, күңел күҙем менән һеҙҙең барлыҡты тойоп алам. Насар уйҙан түгел. Көн һайын ҡояштың ҡалҡырын алдан белеп көтәбеҙ бит әле, шуның ише, йәшәүебеҙҙе тулыландырған, тәү ҡарашҡа күҙгә бәрелеп бармаған мотлаҡлыҡҡа күнегеп китәбеҙ ҡайһы саҡ, ана шул тейешлек юғалһа, йәшәүебеҙҙең йәме китә.

- Һеҙҙе мин генә түгел, зал тулы һалдаттар күҙләй.

- Ҡатын-ҡыҙҙар үтә һиҙгер, беҙҙе меңәрләгән ҡараштың тик берәүһе генә арбауы йәки йәлеп итеүе ихтимал... - Кинәт һөйләшеү темаһын үҙгәртте. - Көтмәгәндә-уйламағанда һылашып ҡамасауламанымммы? Бәлки, берәрен көтәһегеҙҙер, ҡалала йәш, һылыу ҡыҙҙар етерлек. Һалдаттар, ғәҙәттә, увольнениеға тик улар өсөн генә сығалар.

- Бер кемде лә көтмәйем. Киреһенсә, нисек үткәрергә белмәгән көнөмдән ҡотолорға ярҙам итәһегеҙ. Ялым киске алтыла ғына тамамлана.

- Ваҡыттың ҡәҙерен белмәйбеҙ шул. Белмәйбеҙ. Майор... ирем командировкала. - Шулай тине лә затлы тиренән тегелгән теге бәләкәй сумкаһын асып, игәлгән, буялған осло тырнаҡлы нәфис бармаҡтарына эләктереп, һаламдай нәҙек, оҙон сигарет сығарып ҡапты, алтын ялатылған зажигалканан ут тоҡандырғас, тартырға тәҡдим иткәндәй, ҡарашын башта һүндерелмәгән ялҡын теленә, шунан миңә йүнәлтте.

- Ғәфү итегеҙ, тартмайым.

- Насар ғәҙәтегеҙ булмаған өсөн аҡланыу кәрәкмәй. Бөтөнләй тартмайһығыҙмы, әллә ташланығыҙ ғынамы?

- Бөтөнләй.

- Тартҡан ҡатын-ҡыҙҙарға нисегерәк ҡарайһығыҙ?

- Һәр кем теләгәнен эшләй.

- Ә шулай ҙа?




- Ҡабул итеп бөтмәйем. Уларҙың матурлығы, һөйкөмлөлөгө төтөн менән осоп кәмей төҫлө.

Ҡатын зажигалкаһын йәшереп, сигаретын ултырғыс ҡырына баҫып һүндергәс, сүп һауытына ырғытты:

- Һеҙгә оҡшарға теләйем. Ә хәҙер һылыумынмы?

- Үтә.

- Тағы?

- Бик-бик.

- Ошо әйткәндәрегеҙҙе айырым һүҙҙәр менән нығыта алмаҫһығыҙмы? Ир-ат күҙе, ҡатын-ҡыҙ ҡолағы менән ярата, шуға комплиментығыҙҙы ишетергә теләйем.

- Миңә күк умырзая оҡшай.

- Боҙҙо тишеп юғарыға, яҡтыға үрелгән яҙ хәбәрсеһе, тик уның ғүмере үтә ҡыҫҡа.

- Һеҙҙе бары наҙлы сәскәгә генә тиңләргә теләгәйнем, сағыштырыуым урынһыҙыраҡ килеп сыҡты.

- Беҙ ҙә апайым менән бала саҡта иртә яҙҙан ҡырға сыға торғайныҡ. Алыҫ йөрөйһө түгел, урман-тауҙар ауыл эргәһендә генә. Тәбиғәткә булған яҡынлыҡ һөнәр һайлауыма ярҙам итте. Миңә ете, ә апайыма туғыҙ йәштәр тирәһе. Төп Туғай исемен йөрөткән тау битләүендә өйкөм-өйкөм булып үҫкән, бәбәктәрен төпһөҙ зәңгәрлеккә йүнәлткән күк сәскәләр. Яртылаш ҡарҙан әрселгән ер өҫтөн тотошлай тиерлек япҡан умырзаялар юғарынан кителеп төшкән күк ярсығын хәтерләтә. Эйеләбеҙ ҙә битебеҙҙе йомшаҡ суҡтарға тигеҙеп-тигеҙеп алабыҙ. Йәнгә аңлата алмаҫлыҡ рәхәтлек тарала. Ошо томан артындағы алыҫ бала саҡ хәтирәһе йыш иҫемә төшә, төштәремә инә хатта. Был яҡтарҙа умырзая үҫмәй. Һәр хәлдә, ҡырға сыҡҡанда бер тапҡыр ҙа осратманым.

- Һәр төбәк күңеленә яҡын ағастарҙы, үҫемлектәрҙе йәненә шыттыра. Ҡарынында йөрөтөп, теләп тыуҙырған балалары кеүек итеп.

- Ҡайһылай мәрәкә сағыштыраһығыҙ. Һеҙҙең менән һөйләшеүе мауыҡтырғыс.

- Бәлки, мин дә һеҙгә оҡшарға теләйемдер.

- Тырышмағыҙ ҙа. Минең ирем барын беләһегеҙ.

- Шайтан ҡуласаһында әйләнәйекме?

Был ваҡытта офоҡ ситендә босҡаҡтай ғына болот әҫәре күренде лә күҙ менән ҡаш араһында ҙурая барып, ярты күк йөҙөн ҡапланы. Һауа торошоноң ҡырҡа үҙгәреүен хәбәр итеп, һалҡын ел иҫеп ебәрҙе, ағас баштары хәтәр шауланы. Бына һиңә мә, әбейҙәр сыуағы башланып та өлгөрмәгән, көнө боҙолоуға тарта. Өҙөлгән әңгәмә ялғанды:

- Әгәр ял иттерергә теләһәгеҙ, кафеға саҡырығыҙ.

- Кеҫәмдәге һалдат тиндәре ҡуласала ике-өс тапҡыр әйләнеүгә генә етә.

- Мауыҡтырғыс тәҡдим. Беҙ әйләнәбеҙ, донъя әйләнә, иҫергәндәгеләй еңелсә генә баш әйләнә. Атайым йәй етһә, мал аҙбарындағы лапаҫ аҫтына арҡан сәңгелдәк элә торғайны. Беҙҙең тирәләге бала-саға сиратлап, мәш килеп шунда атынабыҙ. Ә мин еңмешләнеп бәүелә бирәм, береһе лә яҡынлай, туҡтата алмай. Ғәфү итегеҙ, мин тағы ла ностальгияға бирелдем... Теләк булһа, аҡсаһыҙ ҙа байрам итергә мөмкин. Бәлки, миңә һыйларғалыр?

- Ҡатын-ҡыҙҙан аҡса теләнселәү - түбәнселек, минеңсә.

- Күрәм, һеҙ саманан ашҡан ғорур.

- Бары шул холҡома ғына маҡтана алам. Рәхим итегеҙ! - Күҙ күреме ерҙәге асыҡ ишек яғына ымланым.

Урам яҡ стенаһы тотошлайы менән быяланан хасил урта ҙурлыҡтағы кафе буш тиерлек. Бында, моғайын да, кискә ҡарай йыйыла башлайҙарҙыр. Күренеүебеҙгә иғтибар итеүсе булманы. Иркенләп түрҙән урын алдыҡ. Бер яҡ ситтәге сәхнәгә тартым фортепиано ҡуйылған урынды һалпыш табаҡ битле, ҡырҡылған түмәрҙәй тәбәнәк буйлы, сибек яурынлы, елкәһендәге көмрөһө йоҙроҡтай тупайып ҡалҡҡан әҙәм биләгән. Һуйған да ҡаплаған Виктор Гюгоның Квазимодоһы, шуға оҡшап тома һаңрау уҡ булмаһа ла ҡолаҡҡа ҡатылыр ҙа әле. Ул инструмент өҫтөндәге махсус ҡулайламаға ҡуйылған партитуранан күҙен алмай, классик әҫәр башҡарып маташа, хаталана, клавишаларҙы бутай.

- Ә был нисек?

- Йонсоҡос көҙгө ямғыр ише.

- Һеҙҙең менән килешәм. - Үтенгәндәй һораны. - Зинһар, йәмһеҙләнеп алырға рөхсәт итегеҙ, үлтереп тартҡым килә.

- Мәйелегеҙ. - Гәлсәрҙән ҡойолған тәмәке һауытын алдына шылдырҙым.

Өҫтәл өҫтөнә шыйыҡ төтөн шаршауы күтәрелде.

- Бая концерт мәлендә конферансье Шопендың "Ямғыр вальс"ын иғлан итеп, саҡ ҡына хата ебәрҙе. Әҫәр "Ямғыр тамсыһы" тип атала, әммә вaҡыт үтеү менән уны жанрына тап килтереп, вальс, тип кенә йөрөтә башлайҙар. Вальс Испанияла яҙылған. Шопендың Жорж Санд менән булған мөхәббәте үҙе бер мажаралы тарих. Шопен бәләкәй сактан уҡ үпкә туберкулезы менән сирләй, шуға сибек кенә булып үҫеп етә. Уны ваҡыт-ваҡыты менән сәсәү быумаһы тотоп яфалар булған. Шулай ҙа виртуоз композитор Европаның күп илдәрен концерттары менән урап сыға, ҡыҫҡа ғына арауыҡта киң билдәлелек яулай. Кем һуң ул Жорж Санд? Уның ысын исеме Амандина Аврора Люсиль Дюпен. Ҡырҡка етеп килгән ҡатын Жорж Санд исеме аҫтында бер нисә роман яҙа, ул һәм ҡыҙ тыуҙырып, ирҙән дә айырылып өлгөрә. Төҫкә йәмһеҙ ҡатын үҙен кеше араһында үтә лә тупаҫ, тәрбиәһеҙ тота, өҫтөүенә, килешһеҙ ҙур костюм, киң эшләпә һәм ҙур итектәр кейеп йөрөй, ә ауыҙында инде һәр ваҡыт арзанлы тәмәке. - Ҡатын Сандты үҙе менән сағыштырҙы әллә, яҙыусыны һүрәтләгәнендә башындағы эшләпәһенә, өҫтөндәге затлы костюмына ҡағылды, сәхнәләгеләй ҡыланып, сигарет көлөн һауытҡа һелкте. - Төүге осрашыуҙарында уҡ утыҙ йәшлек Шопендың әҙәби кисәләрҙән, төрлө осрашыуҙарҙан ҡалмаған яҡын дуҫына биргән төүге һорауы шул була: "Был йәмһеҙ, әрпеш, ир фигеллә ҡатын кем ул?" Әммә илаһи көс йәш композиторҙы унан алты йәшкә өлкәнерәк ҡатын менән яҡынайта. Бында, әлбиттә, Сандтың да йоғонтоһо булғандыр. Беҙ, ҡатындар, саманан ашҡан хәйләкәр, мәкерле, үҙ һүҙебеҙҙе һүҙ итеп, йәнебеҙ тартҡанды алып, һуңғы маҡсатыбыҙға ирешеү юлдар аша булһа ла өлгәшеп, шунан киңәнес алып йәшәгән заттар. Был икәү башта осрашыуҙарын яҡындарынан, дуҫтарынан йәшерәләр, ә һуңынан инде асыҡтан-асыҡ бергә йәшәй башлайҙар, әммә ҡыҙыҡһыныуҙары, йәшәү маҡсаттары, холоҡтары тап килмәгәнлектән, бер аҙҙан айырылырға мәжбүр булалар. Дөрөҫөрәге, татыу итеп, аңлашып йәшәүҙән өмөтөн өҙгән Шопен Сандты ташлап сығып китә, ә тегеһе уға, ҡал, тимәй. Айырылышыуҙарына тағы ла бер сәбәп - Шопендың йоғошло сире - уның кейгән кейемен, тотонған һауыт-һабаһын гел яндырып торорға тейеш булалар. Янғыҙ ҡалған композитор һуңғараҡ бер ниндәй матди милекһеҙ, баш осонда ҡыйыҡһыҙ тороп ҡала. Этҡә ырғытҡандай билгән аҙыҡ менән тукланып, урамда йоҡлап йөрөй. Үлер алдынан ул Сандҡа рәнйеп, дуҫы аша хәбәр ебәрә: "Һин минә ҡосағында үлерһең, тип вәғәҙә биргәйнең бит..." "Ямғыр тамсыһы"на килгәндә ул Санд менән Шопендың Майорка утрауында бергә, ҡайһылыр кимәлдә бәхетле йәшәгән мәлдәрендә яҙылған. Шуға ла әҫәр трагик түгел, оптимистик рухта яңғырай, ҡабул ителә. Мин һеҙҙе саманан тыш белемем менән ялҡытманыммы?

**(Дауамы бар).**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ТОРМОШОҢА КИЛЕП КЕРГӘН ҺӘР КЕШЕ - БҮЛӘК

**Бөгөн өс һорауҙы прозаик, драматург, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Наил Әсхәт улы ҒӘЙЕТБАЙға юллайбыҙ.**



**➔ Быйыл һеҙҙең "Тарихи пьесалар" китабы Салауат Юлаев исемендәге премияға тәҡдим ителде. Шул китап хаҡында һөйләп китһәгеҙ ине.**

**➔ Уҡыусылар менән осрашҡанда яҙыусыларға, мөхәббәт бармы, булһа, нимә ул, тиғәнерәк һорауҙар бирәләр. Һеҙ ошо һорауға ни тип яуап бирер инегеҙ?**

- Яңыраҡ гәзиттә бер ҡатындың хатын уҡырға тура килде. Ул ире менән ғашиҡ булышып өйләнешеүҙәре хаҡында яҙа. Әммә йәшәргә урындары юҡлығы, аҡса етешмәүе арҡаһында мөнәсәбәттәренең ҡырҡыулашыуы, ике яҡтан да ата-әсәһе килеп ҡыҫылғас, аралары бөтөнләй насарайыуы тураһында һөйләй. Бара торғас, ире ҡатынына бер нисә тапҡыр ҡул күтәрә. Шулай итеп, ялҡынлы хистәр әкренләп боҙло нәфрәткә әйләнә, улар айырылышып ҡуя. "Мөхәббәт юҡ ул", тип һығымта яһай хат авторы. Һөйләүенә ҡарағанда, ҡатындың мөхәббәттең нимә икәнен белмәүе, ғашиҡ булыу менән мөхәббәт араһындағы айырманы һиҙмәүе тойола.

Хәйер, ул ғына түгел, күптәр ҡайҙан белһен был айырманы? Хәҙерге кинолар, сериалдар, бигерәк тә эстрада йырҙары, егет менән ҡыҙ араһында барлыҡҡа килгән мөнәсәбәтте - танцалаҙа, урамда осраҡлы рәүештә тыуған, бер ниндәй рухи принциптарға таянмаған мауығыуҙы - ғашиҡ булыуҙы - "мөхәббәт" тип бутай. Шул тойғоно идеал кимәленә күтәрә, уға табынырға өндәй. Тормошто әле аңлап етмәгән йәштәр ошоға ышана, йырҙар тарафынан туҡтауһыҙ тылҡылғас, ғашиҡ булыуҙы бөтә бәләләрҙән ҡотҡарыусы көс тип, йәшәйештең төп маҡсаты итеп ҡабул итә, шуға ғына таянып ғаилә ҡорорға маташа. Егет һәм ҡыҙҙар, әгәр кемгәлер ғашиҡ булмаһа, ҡыйынлыҡтарға ҡаршы тора алмаҫмын, йәшәүемдең мәғәнәһе бөтәр, тигән фекергә килә. Ана шулай итеп яңылыш рәүештә "мөхәббәт" тип аталған мауығыу - ғашиҡ булыу тураһында үтә ҡыҙыл уйҙырма тыуҙыра. Әммә тормош үтә ҡырыҫлығы тиҙ уңыра һәм күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙәр, айырылышыуҙар, хатта үҙ-үҙеңә ҡул һалыуҙар башлана. Әлеге хат яҙған ҡатындың яҙмышы ошоға бер миҫал. Уға ҡайғылының сәбәптәрен аңлатыу өсөн түбәндәгене әйтер инем.

Элекке ваҡыттарҙа ҡыҙ кейәүгә өйләнешеүгә тиклем бөтөнләй күрмәгән, белмәгән. Ҡатын ирен гәйеп итмәҫкә, ниндәй булһа - шулай ҡабул итергә, уны ихтирам итергә һәм уға буйһонорға кәрәклеген белгән, иренең мөхәббәтен яулау мотлаҡ икәнен аңлаған. Ире менән йәшәүҙе енси теләк арҡаһында түгел, ә Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы буйынса биргән тип, Хоҙайға рәхмәт әйтеп ҡабул иткән. Егет кеше лә кәләше алдында оло бурыс алған, уны ғүмер буйы яҡларға, һаҡларға, кейендерергә, ашатырға һүҙ биргән һәм шуны Аллаһы Тәғәләнең бойороғо тип, бер нимәгә ҡарамай үтәгән.

Ысын мөхәббәт - бер-береңә ҡарата ныҡлы рухи һәм дини принциптарға таянған ихтирам, ихтирамдан сыҡҡан һөҡланыу ул. Ни тиклем ихтирам көслө булһа, мөхәббәт тә көслө. Шуға ихтирамды күҙ ҡараһындай һаҡларға, уны үҫтерергә кәрәк.

Ғашиҡ булыу ысын мөхәббәттең башы ғына. Әгәр ысын мөхәббәткә әүерелмәһә, ғашиҡ булыу тормош ауырлыҡтары арҡаһында аңһат ҡына юҡҡа сыға. Сөнки ул буш ерҙә осраҡлы барлыҡҡа килгән, уның рухи нигеҙе юҡ. Ә ысын мөхәббәт һәр саҡ донъя ҡыйынлыҡтарынан һис ҡурҡмай, уны тыныс һәм ризалыҡ менән ҡабул итә. Уларға артыҡ иғтибар итмәй, хатта күрмәй, шуға бер нәмәгә бирешмәй йәшәүен дауам итә ала.

Эстрада йырҙары данлаған "ғашиҡ булышыу" - мөхәббәт түгел, ә бер ниндәй принципҡа нигеҙләнмәгән ваҡытлыса, еңелсә хис ул. Эстрада һәм сериалдар шул "ғашиҡ булыу"ҙы күберәк йәштәрҙең иғтибарын йәлеп итеү өсөн юрамал "мөхәббәт" тип атай. Бәләкәй балаларға әүрәтер өсөн уйынсыҡ биргән кеүек, бәлки, ваҡытында йәштәрҙе лә әүрәтер өсөн ошондай уйынсыҡ кәрәктер. Фәҡәт бала үҫкәс, уйынсыҡтың буш нәмә икәнлеген аңлаған кеүек, һәр кем аҡыллана төшә, ғашиҡ булыуҙың матур биҙәлгән уйынсыҡ ҡына икәненә төшөнөргә, ғаилә ҡорғанда һис тә уның кеүек еңел-елпе тойғоға таянырға ярамағанлығын белергә тейеш.

**➔ Урам хәйерселәр менән тулды. Хәйерселәрҙең етәкселәре бар, шулар уларҙы урамға ултыртып ҡуя, аҙаҡ аҡсаларын тартып ала, тиҙәр. Икенселәр араҡы алыу өсөн хәйер йыя, тиҙәр. Хәйер бирергәмә уларға, юҡмы?**

- Үҙенде ҡайғыртма, кеше хаҡында уйла, тип тәрбиәләйбеҙ балаларҙы. Был фекер бик уҡ дөрөҫ түгел. Кеше иң алда үҙе тураһында уйларға тейеш. Сөнки дини һәм фәлсәфәүи китаптар әйтеүенсә, беҙ был донъяға үҙебеҙҙең кем икәнлегебеҙҙе белеү, аңлау, тойоу өсөн килгәнбеҙ. Кеше төрлө тойғолар кисергәндә үҙен дөрөҫ тоторға тырыша, шулай итеп үҙ-үҙен яһай. Эйе, төрлө хәлдә, төрлө һыналышта үҙеңде нисек тотаһың, шул - һин ул.

Ә нисек тоторға һуң үҙ-үҙеңде секунд һайын тыуып, үҙгәреп торған ситуацияларҙа?

"Ошо хәлдә мөхәббәт, изгелек, ярҙам итеүсе ни эшләр ине?"

Һәр ситуацияла ошо һорауға бирелгән яуап - кешенең үҙе ул.

Кешене уйлама, үҙеңде уйла, йәғни секунд һайын ошо һорауға нисек итеп яуап биреүеңде уйла. Сөнки шул яуап - һин ул. Сөнки һинең менән осрашҡан һәр кеше һинең шул һорауға ниндәй яуап биреүеңде белеү өсөн ебәрелгән.

Ҡартатайым әйтә торғайны: "Һиңә һәр осраған кеше Хыҙыр Ильяс ул. Хыҙыр Ильяс урамда хәйерсе булып ултыра, һине һынап ултыра, шуға аҡсаңды бер ҡасан дә йәлләмә", - ти ине.

Эйе, беҙ йыш ҡына: "Хәйерсе араҡы алыу өсөн аҡса йыя", - тип, ундайҙарға аҡса бирмәҫкә тырышабыҙ. Әммә... Хәйерсене уйлама, үҙеңде уйла. Изгелек итеү өсөн бүләк ителгән мөмкинлектән файҙалан. Хәйерсе аҡсаны нимә эшләтә, ул уның проблемаһы. Хәйерсе өсөн борсолма. Ҡыуанып, хәйерсеңде бир ҙә кит. Шуны бел: хәйерсе бит һине һынау өсөн ебәрелгән. Әгәр аҡсаңды йәлләһәң, һин - ярлы һәм мәңге ярлы булып ҡаласаҡһың, хәйерсегә аҡса һалһаң, һинең тирәләге ваҡиғалар ыңғай йүнәлеш ала, аҡсаң хәрәкәткә килә, аҡса ағымы һинең аша үтә башлай, һин аҡсаға күмеләсәкһең.

Эйе, һәр осрашыу, һәр осраған кеше (дошманмы, дуҫмы - уныһы мөһим түгел) беҙҙең өсөн бүләк ул. "Мин - кем?" тигән һорауға, "Мин - мөхәббәт, изгелек, ярҙам итеү", тип яуап биреү мөмкинлеген тыуҙырған бүләк. Оло бүләк. Шул ваҡытта һин үҙең дә һәр осраған кеше өсөн бүләк. Шуға күрә тормошоңа килеп кергән һәр кешенең ҡайһы яғы менән бүләк икәнен таба бел, аңлай бел, яуап бирә бел. Ни өсөн килә һинең янға һәр кеше? Бел: һине бүләк тиеп килә. Һәм һиңә бүләк булып килә.

Аллаһы Тәғәләнең оло, бөйөк һүҙе бар: "Мин һеҙҙең янға фәрештәнән башҡа бер кемде лә ебәрмәйем".

- Беҙҙә Башҡортостанда тарихи пьесалар китабы баҫылмай, сөнки драматургтарыбыҙ әҫәре икәү-өсәү менән генә сикләнә, һәр драматург тарихи пьеса ла яҙмай. Тарихи пьесаларҙың булмауы йәш быуынды патриотик рухта тәрбиәләү эшендә ҙур ауырлыҡтар тыуҙыра. Был уғата мөһим эшкә тиҫтәнән ашыу профессиональ театрҙар һәм йөҙәрләгән халыҡ театрҙары ҡушылып китә алмай. Һәм беҙ йәштәрҙең йылдан-йыл рухи яҡтан һыуыныуын, ил, халыҡ, тел тураһында уйламауын, патриотик тойғоларҙы онота барыуын күрәбеҙ. Был бик аяныс хәл. Ошо хаҡта босолоп, мин үҙемдең патриотик рух менән һуғарылған, арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән һөҡланып яҙылған тарихи пьесаларымды бер йыйынтыҡҡа туплап нәшер итергә булдым. Ындай китапты театрҙар, мәктәптәрҙәге драма түңәрәктәре күптән һорай. З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенә рәхмәт, улар ниәтемде хупланы. Һәм бына тиҫтәләгән йылдар эсендә тәү тапҡыр уҡыусылар, театрҙар һыуһап көткән китап нәшер ителде.

Быйыл Салауат Юлаев исемендәге премияға дәғүә итеүсе китаптарҙан минең "Тарихи пьесалар" йыйынтығы ҡырҡа айырылып тора, тип уйлайым. Һүҙ ҙә юҡ, башҡа дәғүәселәрҙең дә әҫәрҙәрендә тыуған ил, халыҡ хаҡында әйтелә. Ә минең китаптың төп йүнәлеше, төп идеяһы - тулыһынса, башынан аҙағынаса патриотик рух менән һуғарылған, пьесалар илебеҙ, халҡыбыҙ тарихының данлы биттәрен күрһәтә, шул тарихта юйылмаҫ эҙ ҡалдырған арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең эштәрен һәм яҙмыштарын һүрәтләй. Ана шуға ла йыйынтыҡ оло тәрбиәүи көскә эйә, тип өмөтләнәм. Ул уҡыусыларҙа, бигерәк тә йәш быуында, тыуған илебеҙгә, уның тарихына, күренекле кешеләренә һөйөү уята, изгелеккә һәм ғәҙеллеккә саҡыра.

Китапта төп геройҙар итеп халҡыбыҙҙың яҙмышында ҙур роль уйнаған шәхестәрҙе алдым. Уларҙың һәр береһенең яҙмышы, йәшәү принциптары уҡыусыларға өлгө булып тора, тормош юлын һайларға өйрәтә: Урал батыр, Ғайса пәйғәмбәр, Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Шәйехзада Бабич, Зәки Вәлиди, Рәми Ғарипов, Һәҙиә Дәүләтшина, Мостай Кәрим һәм башҡалар.

Юғары бүләккә дәғүә итеүсе ҡалған китаптарҙағы әҫәрҙәр призлар яуламаһа, маҡтана биререрәк шуны ла әйтәйем: йыйынтыҡтағы ингән ун өс пьесаның уныһы Мәҙәниәт министрлығы үткәргән төрлө конкурстарҙа билдәле сәнғәт әһелдәренән торған жюри ағзалары тарафынан еңеүселәр иҫәбенә индерелде. Күптән түгел яҙылыуҙарына ҡарамай, туғыҙ пьеса профессиональ театрҙар сәхнәһендә ҡуйылды.

ИНТЕРНЕТТАН



# АРАЛАШЫП...

## йәшәйек

■ Торонтолағы медицина мәктәбе тикшеренеүселәре билдәләүенсә, туғандар менән аралашып йәшәү ғүмерҙе оҙайта. Экспериментта 57-84 йәшлек өлкәндәр ҡатнашҡан, асыҡланыуынса, кем туғандары менән йышыраҡ аралашҡан, улар оҙағыраҡ йәшәгән. Психологтар ҙа, яңғыҙлыҡ кешенең сәләмәтлек торошона яҡшы йоғонто яһамай, ти. Шуға ла улар оло йәштәгеләргә әүҙем булырға, төрлө сараларҙа ҡатнашырға саҡыра.

■ Төндә насар йоҡлаһаң, йоҡларға ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләп ал, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ-ның Йоҡо милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй ҡыбырларға яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоҡоноң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙән кеше артыҡ ауырлыҡ йыя икән. Бәҡтиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән борсолоу тойғолары кисерә. Шул рәүешле стресс ҡорбанына әүерелгән кеше юғары калориялы аҙыҡты күберәк ҡуллана башлай. Бындай төркөмгә ҡараусылар насар яңылыҡтарға иғтибар итмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән. Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Президент кампанияһы мәлендә иҡтисади хәлдәрҙең насарайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнелә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки уларҙа эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, туйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыҡты ауыр көндәр өсөн "запас"ҡа тиңләй. Шуға ла кем артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барығыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - тип билдәләй профессор Джулиано Ларан.

■ Балыҡ диетаһы яман шештең ҡайһы бер төрҙәренән дә һаҡлай. Ғалимдар билдәләүенсә, бигерәк тә һыуыҡ диңгеҙ һыуҙарында йөҙгән омега-3 майлы кислоталарына бай майлы балыҡтар файҙалы. Ә бына шәхси кешеләр тарафынан фермаларҙа үрсетелгән балыҡ ашаусыларҙа яман шешкә ҡаршы тороу һәләте түбән, сөнки яһалма аҙыҡ ашап үҫкәнлектән, был балыҡтарҙа омега-6 майлы кислоталары күберәк. Һуңғыларына һәмбаш ғаиләһенә ҡараған балыҡтар инә. Балыҡтың нисек әҙерләнеүе лә мөһим. Мәҫәлән, тоҙло балыҡ үҙенең профилактик үҙенсәлектәрен юғалта, ә ҡыҙҙырылғаны, киреһенсә, яман шеш хәүефен арттыра, сөнки ҡыҙған саҡта аҙыҡта канцероген аминдар туплана.

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, кеше үҙенең ғүмеренең дүрттән бер өлөшөн йоҡлап үткәрә. Эштә коллегалар менән аралашыу, шулай уҡ социаль селтәрҙәр яҡынса 9 йыл ғүмерҙе ала. 3 йыл - транспортта эшкә йөрөүгә сарыф ителә, магазиндар буйлап йөрөүгә шулай уҡ дөйөм 4 йыл тирәһе ваҡыт кәрәк. Шуға ла ғалимдар көн тәртибен ныҡлап уйлап, кәрәкмәгән күп нәмәләрҙән баш тартырға кәңәш итә.

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

# СӘМЛЕ ЛӘ, ҒӘМЛЕ ЛӘ БИТ УЛАР!



**Шағирә Зөлфиә Ханнанованың:**
**Ағинәйҙәр рухы - изге бетеү**
**Ят күҙҙәрҙән һаҡлар ил ҡотон.**
**Ил, тип доға ҡылыр**
**Ил инәһе барҙа**
**Йәшәр әле, йәшәр башҡортом! -**
**тигән шиғыр юлдары менән башланып китте Күгәрсен районының Мораҙым тарлауығы биләмәһендә үткәрелгән ағинәйҙәр йыйыны. Шағирә ҡылыҡһырлағандар менән берәү ҙә бәхәсләшә алмаҫ. Сөнки ағинәй һүҙен, ағинәй аҡылын ололау беҙҙең ҡанға һеңгән. Заманалар ағышында ошо хәҡиҡәт бер аҙ иғтибарҙан ситләшеп киткән булһа, бөгөн республикабыҙ ағинәйҙәре тырышлығы менән бөтөн был тәбиғи төшөнсәләр үҙ ыҙанына ҡайтты.**

Иҫ киткес йәмле тәбиғәт ҡосағында, тыуған төйәгебеҙҙән һоҡланғыс урындарының береһендә йыйылыу ҙа осраҡлы түгел. Күгәрсен районы хакимиәте башлығы Фәрит Мырҙагилде улы Мусиндың ихласлығы һәм халыҡтың проблемаларына, көнитмешенә етди ҡарауы, йәғни зыялылығы бирҙе ағинәйҙәргә был мөмкинлекте.

Был матур сарала Күгәрсен, Баймаҡ, Бөрйән, Әбйәлил, Хәйбулла, Ейәнсура, Йылайыр, Көйөргәҙе, Учалы, Ишембай, Мәләүез, Федоровка, Стәрлебаш райондарынан, Сибай, Күмертау һәм Салауат ҡалаларынан йыйылған дүрт йөҙгә яҡын ағинәйҙән тыш, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары Йомабикә Ильясова, Башҡортостан Башлығы аппараты Ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығының милли сәйәсәтте тормошҡа ашырыу мәсьәләре буйынса бүлек етәксеһе Ришат Сабитов, Суд приставтары федераль хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Зариф Байғусҡаров; Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Тамыр" балалар студияһы етәксеһе Гөлназ Ҡолһарина, яҙыусы, күренекле йәмәғәт эшмәкәре Мәрйәм Бураҡаева һәм Республика башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Гөлфиә Янбаева ҡатнашты.

Тарлауыҡ яланы иртәнсәктән аллы-гөллө сәскә түтәле кеүек ине. Һәр райондың ағинәйҙәре ҡул эштәре, кәсеп-шөғөлдәре күргәҙмәһе ойошторған, үҙҙәре иһә сынъяһау булып милли кулдәктәр кейеп алған. Йырлап та, таҡмаҡлап та ебәрәләр, бейеп тә китәләр. Үҙе бер күңелле, мәртәбәле күренеш!

Ҡунаҡтарҙы ҡаршы алып, сәләмләү өлөшө тамамланғас, бер урынға тупланып эш башланы ағинәйҙәр. Улар бит бында уйын-көлкө өсөн генә килмәгән. Һәр райондың ҡор етәксеһе эшләнгән эштәре, планлаштырылғандары, сетерекле мәсьәләләре хаҡында һөйләне. Хәл итә алмағандарын уртаға һалып кәңәш һораны, уның һорауына етәкселәр ҙә ҡолаҡ һалды. Шулай байтаҡ проблемалар хәл ителеү юлын тапты. Ҡала ерлегендә ошондай ҡор тотоп бик әүҙем эшләүсе Сибай ағинәйҙәре тәжрибәләре менән уртаҡлашты. Улар ауылдарҙағы кеүек һәр кемдең ғаилә хәлен белеп тора алмаһа ла, ҡатын-ҡыҙҙарҙың милли мәҙәниәтҡә ылығыуына булышлыҡ итә: онотолған кәсептәрҙе тергеҙә. Республикала уларҙыҡы кеүек затлы түшелдеректәр, селтәрҙәр юҡ әлегә. Әбйәлилдәр ҙә хәҙер үҙҙәре бер социаль-психологик үҙәк кеүек булып алған халыҡ өсөн. Улар социаль хәүеф аҫтындағы ғаиләләр, ҡарауһыҙ балалар, эскелек ҡолондаһы ҡатын-ҡыҙҙар менән эшләп һәм ыңғай һөҙөмтәләр алып өйрәнгән. Хәйбулла ағинәйҙәре башҡарған эштәрҙең һынап осона сығырлыҡ түгел: боронғо кәсептәрҙе тергеҙәләр, йолалар менән байрамдарҙы ғына түгел, туйҙарҙы ла, юбилей кисәләрен дә биҙәйҙәр, ауыл менән ауыл, район менән район осрашыуҙарын ойоштороп, үҙара аралашыуҙар менән дә йәмләйҙәр тормоштарын. Ейәнсуралар экологик өмәләрҙе әүҙемләштереүҙәре тураһында ғорурланып телгә ала. Баймаҡтар иһә хәүефле төркөмгә ингән ғаиләләрҙе иғтибар үҙәгенә алып, уларҙа тәрбиәләнгән балаларҙы хәстәрләүҙе лә үҙ бурысы итеп алған. Учалылар бөтөн башҡа эштәр менән бергә, халыҡтың сәләмәтлеген хәстәрләп, "Ауылпиада" тигән сәләмәтлек саралары ойоштора башлаған. Йылайырҙар иһә буйҙаҡ егеттәрҙе өйләндереү маҡсатын да алға һөрөп, димләү йолаларын еренә еткереп атҡарыуҙары тураһында еткерҙе. Күгәрсен ағинәйҙәре эскелекте һәм әхлаҡһыҙлыҡты иң беренсе дошмандары итеп күреүҙәрен белдерә. Маҡтаулы эш түгелме ни былар? Бик тә маҡтаулы һәм сауаплы эштәр!

Әгәр һәр район ағинәйҙәренең башҡарғанын һанай китһәң - гәзит биттәре етмәҫ ине. Улар хәҙер район һәм ауыл биләмәләре етәкселәре менән дә дуҫлашып бөткән. Етәкселәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың бик ҙур ярҙамсы булыуын да аңлап алды. Баштараҡ "Былар ниңә бутала әле аяҡ аҫтында..." тиеберәк ҡараусылар, ыңғай хәл-ваҡиғалар шаһиты була-тора, үҙҙәре үк ағинәйҙәр ярҙамын, кәңәш-фекерен ҡабул итә. Мәҫәлән, эсеп ятҡан ғаиләгә яңғыҙ башың барып инергә, ауылдың абруйлы инәйҙәре-апайҙары менән барыу һәм тәжрибәле ҡатын-ҡыҙ көслөгәнән сығып хәл итеү аҡыл түгелме ни? Юҡҡамы ни борон-борондан халҡыбыҙ ғаиләләре өләсәйҙәр, ағинәйҙәр етәкселегендә көн иткән. Беҙҙең ирҙәр бит яу сапҡан, мал тапҡан, әммә ғаиләара мәсьәләләргә артыҡ тыҡылмаған, һәм уларҙың ҡарашы әле лә шулай. Ни хәл итәһең - менталитет. Йәш ҡатын-ҡыҙ бала табыу һәм бала бағыу менән бәйле булһа, олораҡ инәйҙәр, өләсәйҙәр ғаиләне, затырыуҙы бәлә-ҡазанан, яман эштән, ҡырын-ҡаранан һаҡлап, ҡурсып йәшәгән. Бөгөнгө ағинәйҙәр ҙә тап шул вазифаны үтәү юлында.

-Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ "уянғас", улар милләткә хәүеф янауын аңлап алғас, иманым камил, бәләнең артыһы - юҡ, - тип ағинәйҙәрҙең күңелен үҫтерҙе Йомабикә Ильясова. - Ғаиләгә килгән ауырлыҡтарҙың сәбәбен дә иң тәүҙә ҡатын кеше төшөнөргә тейеш, ул төшөнһә, мотлаҡ, дөрөҫ юҫыҡты таба аласаҡ. Ә инде төшөнмәһә - бар нәмә тарҡала. Шуның кеүек, милләт проблемаларының нигеҙен дә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ төшөнөп, аңлап, эшкә керешә. Ошолай барһа, тағы ла бер нисә йылдан ауылдарҙағы күп кенә яман күренештәр ҡырҡа кәмер, тип өмөтләнәм...

Ришат Сабитов үҙенең телмәрендә ҡатын-ҡыҙҙың дөйөм кешелек өсөн әһәмиәтен, мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Бер ҡатын-ҡыҙ тирәһендә күпме кешe, йәғни шәхес өйләнә һәм формалаша. Мәҫәлән, ғаиләлә әсәйҙең тирәягындағыларына мөнәсәбәте, уның аң кимәле, тормошҡа ҡарашы һ.б. билдәләмәләре нигеҙендә уның балалары үҫешә, әгәр улар ыңғай икән, был ғүзәллек нурында уның менән аралашыусылар ҙа, эшендәге коллегалары ла, күршеләре лә "йылына". Һәм был үҙенә күрә тәрбиә, ябай тормош, йәшәйеш тәрбиәһе. Ошоларҙан сығып, ағинәйҙәрҙең ваҡыттарын, хис-тойғоларын түгеп, бындай файҙалы йәмәғәт эштәре менән шөғөлләнеп йөрөүе - ул милләтебеҙҙең алға китешенең оло күрһәткесе", - тине ул.

Аҙаҡтан, үҙҙәре генә ҡалғас та, һаман фекер алышты әле ағинәйҙәр. Берәүҙәре "Шул-шул хәлдә ҡалайтырға була әле?" тиһә, икенсе төбәктекеләр: "Беҙ шулай иттек", - тип ҡалҡып сыҡты. Ҡайһы бер мәсьәләләрҙәге юридик, социаль өлкә кәңәштәре лә ярап ҡалды. Шулай, шаулап-гөрләп үтеп китте республика ағинәйҙәренең сираттағы ҡоро. Ер-һыу күреп, аралашыуҙан тыш, һәр кем оҙайлы ваҡытҡа еткәндәй рухи аҙыҡ алып, тәжрибә бүлешеп, уны-быны самалап, күҙ һалып, ҡолаҡҡа элеп, "мыйыҡҡа урап" ҡайтҡандыр, моғайын. Шулай булмай әллә, сәмле лә, ғәмле лә бит улар - ағинәйҙәр!

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

✓ *Иң көслө доғаларын уҡып, йән-яғына өшкөрә, ҡороулы һыҙма мылтығын ҡулға ала. Күп тә үтмәй, шау-шыу тамам яҡынлаша, шул арала кемдер ишекте бик ҡаты итеп тарта, ләкин ул бирешмәй, сөнки ишек доғалар уҡып бикләнгән була.*



МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?



Кешелек донъяһынан тыш, уға йәнәш донъялар барлығы һәр кемгә билдәле. Унда йәшәгән йән эйәләре, уларҙың тереклек итеүе, йәшәү формалары күп төрлө. Был заттарҙың ҡайһылары зарарлы, яуыз, икенселәре кешегә зыянһыҙ йәшәй. Улар кешегә күренмәй, йәки үҙ теләктәре менән генә кешегә күренә ала. Кешенең был заттарға ҡаршы торорлоҡ көсө юҡ. Берҙән-бер сара - доғалар. Доғалар һаҡлай кешене ен ҡағылыуҙан. Әйткәндәй, кеше ошо йән эйәләренә төрлө исемдәр биргән, зарарлы булыу-булмау кимәлен белгән. Шул нигеҙҙә тейешле доға ҡулланған. Ҡайһы берҙә кешене белгән доғалары ғына ҡотҡара алмаған: ваҡытында сараһын күрмәһә, үлемгә дусар булған. Ошо мәлдә ул муллаға барған. Ул тейешле доғалар уҡып, төрлө ысулдар менән дауалап, өшкөрөп, аяҡҡа баҫтырған. Муллаларҙың да төрләһе булған. Араларында Шәмиғол хәлфә кеүектәре ен ҡағылыуҙы бик уңышлы дауалаған. Уларҙың мөмкинлектәре мөғжизә кеүек. Көслө муллалар күрәҙәлек итеү, сит заттарҙы күреү һәм уңышлы көрәшеү сараларын белгән. Халҡыбыҙ араһында улар байтаҡ. Үҙҙәренең изгелектәре, ҡылған яҡшылыҡтары менән кеше хәтерендә ҡәҙерләп һаҡлана, улар өлгөһө һәр кемгә юл яҡтырта.

Кешеләр йәшәү дәүерендә йәнәш донъя йән эйәләре менән даими осрашып йәшәгән: берәүҙәрен үҙ күҙҙәре менән күргән, икенселәрен ҡолаҡтары менән ишеткән. Берәүҙәренән ҡурҡҡан, икенселәренән ҡурҡмаған, сөнки зыяны теймәсен белгән. Ошо осрашыуҙар халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадында ла сағылыш тапҡан.

Йәнәш донъя вәкилдәренә арналған жанрҙың үҙ исеме лә булмай, тикшерелмәй ҙә. Үткән быуаттың 70-се йылдарында ғалимдарыбыҙ Ф. Нәҙершина һәм Ә. Сөләймәнов уларҙы өйрәнеп, хөрәфәти хикәйәләр тигән исем бирҙе һәм юҡ-барға ышаныуҙан тыуған ижад емеше итеп баһаланы. Хөрәфәти ышаныуҙарға бәйле хикәйәләр һәм унда сығыш яһаусы мифик заттар кеше фантазияһы тарафынан тыуҙырыла, тип иҫәпләнде, йәғни һөйләүсе үҙ фантазияһы көүҙәләндергән заттарға шул тиклем ышана, хатта уларҙы көтгә рәүештә бар, тип раҫлай. Йәнәш донъя вәкилдәрен инҡар итеүҙең нигеҙе дин ине. Совет осоронда атеизм иғлан ителгәс, дингә бәйле бөтә нәмә уйҙырма тип һаналды. Дин эҙәрлекләнгәс, күрен-мәгән донъя вәкилдәре мифик заттар рәтенә ҡуйылды, һөйләүсе хәбәре ысын тип ҡабул ителмәне, киреһенсә, көлкөгә дусар булды. Ысын булһа ла кеше ышанмаҫты һөйләмә, тигән хәбәр шунан тыуғандыр тип фаразларға кәрәк. Ошо тыйыу арҡаһында үҙаллы йәшәүгә хоҡуҡлы жанр көләмәс рәтенә ҡуйылды. "Ҡурҡҡанға ҡуш күренә" кеүегерәк ҡабул ителде.

Хәҙерге асыҡлыҡ, демократия осоронда дини тыйыуҙар бөттө. Халҡыбыҙ әкренләп дингә кире ҡайта. Һөҙөмтәлә дингә бәйле персонаждар ҙа аяҡҡа баҫты, уларҙың ысынлап та барлығы асыҡланды. Был турала матбуғатта ла, телетапшырыуҙарҙа ла күп һөйләнелә. Бер ниндәй фән дә, физик закондар ҙа аңлата алмаслыҡ күренештәрҙең шаһиты булабыҙ. Уларҙың күбеһен тик дини нигеҙҙә генә аңлатырға була.

Шулай итеп, хөрәфәти хикәйәнең нигеҙендә ниндәйҙер ысынбарлыҡ ята. Телдән-телгә күсеп, ул шымара, ҡабартыла һәм әкиәт жанрына бик яҡынлашып ҡуя. Совет осоронда, эҙәрлекләүҙән ҡурҡып, уларҙың күбеһе махсус рәүештә көләмәскә йә әкиәткә күсерелде. Хөрәфәти хикәйәләрҙең һәр береһенең авторҙары бар, шуның менән ул әкиәттәрҙән айырыла. Билдәле булыуынса, әкиәттең авторы юҡ, ул халыҡтың коллектив ауыҙ-тел ижады емеше.

Түбәндә бирелгән хөрәфәти хикәйә өлгөләре әкиәткә нығ оҡшаған, булған хәл тип ҡарауы ла ауыр. Ләкин уларҙың авторҙары бар. Үҙем күрҙем, үҙем ишеттем тип һөйләй улар. Ышаныу-ышанмау тыңлаусының үҙенән тора.

Тәүге 8 хикәйә өлгөһө заманында даны таралған ҡурайсы һәм оҫта һунарсы тарафынан һөйләнелгән һәм уның тарафынан хәтерләп яҙылған. Һунарсы XIX быуат аҙағында тыуһа, улы XX быуаттың тәүге сирегендә тыуа. Мин шул ҡурайсының ейәне булам.

### КҮСКЕНСЕЛӘР

Ҡарт һунарсы һунарға мауығып, бик һунға ҡала һәм йәйләүҙәге бер аласыҡҡа инеп йоҡламаҡсы була. Әлхәм уҡып, аласыҡ ишеген ныҡлап бикләй ҙә йоҡларға ята. Тиҙ генә йоҡлап китә алмай. Бер ваҡыт алыҫта шау-шыу ҡуба һәм йәйләүгә яҡынлаша башлай. Бала-саға илауы, һәш тә һәш тип һыйыр ҡыуған тауыштар торған һайын асығыраҡ ишетелә башлай. Көҙ миҙгеле була һәм йылдың был ваҡытында йәйләүҙән йәки йәйләүгә ошолай һунлап кешеләрҙең күсеп килеүе мөмкин түгел. Күскенселәрҙең кемдәр булыуы мөмкин, тип уйлап ята торғас, мосолман пәрейҙәренең урындан-урынға төндә генә күсеп йөрөүҙәре тураһында ишеткәндәрен иҫенә төшөрөп, бик нығ ҡурҡыуға ҡала. Иң көслө доғаларын уҡып, йән-яғына өшкөрә, ҡороулы һыҙма мылтығын ҡулға ала. Күп тә үтмәй, шау-шыу тамам яҡынлаша, шул арала кемдер ишекте бик ҡаты итеп тарта, ләкин ул бирешмәй, сөнки ишек доғалар уҡып бикләнгән була. Билдәһеҙ йән эйәһе ишекте асырға маташҡан арала, шау-шыу байтаҡ алыҫлаша, ә теге ишекте аса алмауына асыуланып булһа кәрәк, нимә менәндер уға бик ҡаты итеп һуға, ләкин ишек был юлы ла бирешмәй. Шау-шыу ишетелмәй башлай, шул арала тыштағы йән эйәһенең аҙым тауыштары ла шул яҡҡа китеп юғала. Ошонан һуң һунарсы төнө буйы йоҡлай алмай доғаларын уҡый. Иртәнсәк, яҡтырыу менән, ул тышҡа сыға һәм ишек эргәһендә ятҡан кеше башы ҙурлығындай ташты күрә. Ишектә тәрән генә таш эҙен күрә, ә аласыҡ артында шаҡтай уҡ таҡыр юл барлыҡҡа килеүен күреп, аптырай. Һунарсының һөйләүенә ҡарағанда, мосолман пәрейҙәр әлхәмде һәм доғаларҙы яттан белеүсе мосолманға зыян килтермәй, әммә динһеҙ кешеләр уларҙан ҡасып ҡотола алмай. Мосолман перәйҙәренең ҡиәфәттәре кешеләрҙекеке кеүек уҡ, тик айырма шунда: уларҙың күҙе берәү, төндә яҡтырып тора һәм маңлайының уртаһында була. Һунарсы, пәрей ишек менән булашҡан арала, уның яҡтырып торған берҙән-бер күҙен ярыҡтан асыҡ күргән. Ишеккә һуҡҡан таштың ҙурлығы үҙе үк уның көскөүәтен күрһәтә.

Рауил АСИҒОЛОВ,
Бөрйән районы.
(Дауамы бар).

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Яҙырға өйрәнегеҙ

Күпселек кеше хыялдарын һәм теләктәрен яҙыуҙы ауырлыҡ итеп күрә. Бер ваҡыт семинарҙа мин ҡатнашыусыларға эшләүе ябайыраҡ булһын өсөн махсус схемалар тараттым, әммә улар менән бары тик тыңлаусыларҙың 5 проценты ғына файҙаланды. Күптәребеҙ аңы менән был идеяның файҙалы булыуын аңлай, ләкин нимәләр эшләргә ялҡаулана. Улар, нимә теләгәнемде былай ҙа яҡшы беләм, тип раҫлай.

Бындай мөнәсәбәт планетала йәшәүселәрҙең ни бары 5 проценты ғына маҡсаттарына өлгәшеүенең сәбәбен яҡшы асып бирә. Улар һөҙөмтәне күҙәтеү өсөн барлыҡ маҡсаттарын яҙып барырға ялҡауланмай. Күптәр: "Минә яҙып тороу кәрәкмәй. Мин былай ҙа иҫләйем", - тиер. Әммә был ысынлап та шулаймы? Ә һеҙ бөтөн нәмәне лә хәтерҙә тота алаһығыҙмы?

Бында психологик принцип эшләй: күҙ сенсор ҡабул итеүҙең яҡынса 87 проценты өсөн яуап бирә. Шуға өҫтәп, яҙыу процесы барышында кинетик энергия төпкө аңға уйҙарға ҡарағанда күберәк йоғонто яһай. Мәктәптә тәртибегеҙ насар булһа, уҡытыусы бер һөйләмде бер нисә тапҡыр күсереп яҙырға мәжбүр итә инеме? Ул яҙғанығыҙҙың хәтерегеҙҙә ҡаласағын яҡшы белгән. Төпкө аң яҙма инструкцияны тиҙ генә эләктереп ала һәм алынған мәғлүмәтте мейегә, үҙәк нервылар системаһына тапшырып, уны ысынбарлыҡҡа әйләндерә. Түбәндә күрһәтелгән эш схемаһы, моғайын, һеҙгә шәхси ижади ғәмәли план төҙөргә ярҙам итер.

### Аныҡ ғәмәлдәр схемаһы:

- Был минең маҡсатым (уны ҡағыҙҙа һүрәтләп, мөмкин булһа, рәсем йәки фото ҡуйығыҙ).
- Ни өсөн был маҡсатҡа өлгәшергә теләйем? Ул миңә ниндәй файҙа килтерәсәк?
- Уға өлгәшеү өсөн ниндәй ғәмәлдәр ҡуллана алам?
- Кемдән һәм ҡайҙа профессиональ ярҙам һәм кәңәш ала алам?
- Маҡсатҡа өлгәшеүҙең һуңғы датаһы.
- Мин планымды билдәле даимилыҡ менән ҡайтанан ҡараясаҡмын.
- Минең тәүге аҙымдарым ниндәй буласаҡ?
- Һәр стадияның башын һәм аҙағын билдәләгеҙ: Башы - Тамамланыуы.
- Бөтөн ошо осор дауамында ыңғай көйләнештә булығыҙ. Маҡсаттарға өлгәшеү өҫтөндә эшләү процесында үҙегеҙҙе ыңғай көйләнештә тотоғоҙ.

**Тормошоғоҙҙағы алты мөһим өлкәлә маҡсаттар ҡуйығыҙ:**

**Карьера.** Үҙ һөнәремдә һәм эшемдә нимәгә өлгәшергә теләйем?

**Финанстар.** Даими рәүештә күпме сумма алырға теләйем (аныҡ һан).

**Физик сәләмәтлек.** Сәләмәтлегемде нығытыу һәм физик формамды тотоу өсөн ниндәй программа ҡулланырға теләйем?

**Интеллект.** Ниндәй өлкәлә күберәк белем тупларға теләйем?

**Ғаилә.** Ғаиләм һәм тормош иптәшем менән ниндәй мөнәсәбәттәр теләйем?

**Рухи тормош.** Рухи өлкәлә нимә теләйем?

Был маҡсаттарҙы өҙайлы һәм ҡыҫҡа мөҙҙәтле итеп бүлергә мөмкин. Барлыҡ өҙайлы һәм ҡыҫҡа ваҡытлы маҡсаттарығыҙҙың исемлеген төҙөгөҙ һәм хәҙер үк улар өҫтөндә эшләй башлағыҙ.

Роберт ЭНТОНИ.
(Дауамы бар).

ЙӨШЕЛ ДАРЫУХАНА

# СӨГӨЛДӨР



**Талмудта әйтелә: "Вавилонда проказалы һәм тәндәре эренләп ауырыусылар юҡ, сөнки унда сөгөлдөр ашайҙар, бал эсәләр һәм Евфрат һыуында йыуыналар", - тиелә. Боронғо халыҡтар сөгөлдөрҙө тәмле аҙыҡ һәм файҙалы дарыу булған өсөн яратҡан.**

Тәү башлап сөгөлдөрҙө фарсылар, һуңынан төрөктәр һәм боронғо римляндар сәсеп үҫтерә башлай. Шуныһы ҡыҙыҡ, был халыҡтар сөгөлдөрҙө талаш символы тип иҫәпләгән. Ул замандa Европала сөгөлдөрҙөң - һабағын, Азияла тамырын ашайҙар. Әйтергә кәрәк, турамаларҙа ҡулланылған сөгөлдөр япраҡтары каротинға - А провитаминына һәм фолий кислотаһына бик бай.

Сөгөлдөрҙөң химик составы үҙенсәлекле. Тамыраҙығында 25 процент шәкәр - глюкоза, фруктоза, сахароза бар. Органик кислоталар - лимон, ҡуҙғалаҡ, алма кислоталары. Төрлө аҡһымдар, В1, В2, В6, С, Р, РР, каротиноидтар, пантотен һәм фолий кислотаһы, пектин, пигменттар, тимер, марганец, калий, кобальт, магний, йод тоҙҙары ла күп. Шулай уҡ күҙәнәклек, аминокислоталар (лизин, валин, аргинин, гистидин һ.б.) бар. Был турала Гиппократ, Гален, Диоскорид, Парацельс һәм башҡа бөйөк табиптар белеүгә белмәгәндер, әммә улар сөгөлдөрҙө аҙ ҡанлылыҡ, биҙгәк, аш һеңдереү ағзалары һәм лимфа тамырҙары ауырыуҙарынан дауалау маҡсатында ҡулланғандар.

Сөгөлдөр составында булған күҙәнәклек, алма, лимон һәм башҡа биоген кислоталар эсәктәрҙең тулҡын рәүешендә ҡыҫылып эшләүен яҡшырта. Шуға ла эс ҡатыуҙан, аш һеңдереү процесын яйлау, бауыр ауырыуын дауалау өсөн көн дә ашарҙан алда 100-150 грамм бешкән сөгөлдөр ашарға кәрәк.

Сөгөлдөрҙә тағы ла кобальт, рубидий, цезий, медь, цинк, тимер, хлор, калий, фосфор, көкөрт, магний микроэлементтары табылған. Уларҙың күбеһе ҡан барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнаша, шуға сөгөлдөрҙө күп ашаған кеше аҙ ҡанлылыҡ менән яфаланмай.

Даими рәүештә сөгөлдөр ашаһаң, нервылар системаһы тыныслана төшә, был магний матдәһенә бәйле. Нервыларҙы тынысландырыу өсөн ун көн дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр ярты стакан сөгөлдөр һутына бер балғалаҡ бал ҡушып эсеү бигерәк яҡшы.

Ҡырғыс аша үткәрелгән сөгөлдөрҙө сей яра, шеш өҫтөнә һалһаң, сирҙән арыныуға ярҙам итә. Яман шеш күҙәнәктәренә ҡыҙыл сөгөлдөр бик үҙенсәлекле тәьҫир итә. Ике-өс аҙна ошо йәшелсә менән дауаланғандан һуң ауырыуға хәл кереп, температураһы төшөүе, ауырлығы артыуы, ҡан составы яҡшырыуы күҙәтелгән. Ғилми тикшеренеүҙәр аша яман шеште барлыҡҡа килтереүсе күҙәнәктәргә актоциан - йәшелсәгә төҫ биреүсе матдәнең тәьҫир итеүе асыҡланған. Ҡара көртмәле, ҡара ҡарағат, ҡара мәрүәр (йәки бүре емеше), һары мәтрүшкәнең актоциандары яман шеште барлыҡҡа килтереүсе күҙәнәктәрҙең үҫешен туҡтатырға һәләтле. Әммә ҡыҙыл сөгөлдөр һигеҙ тапҡыр көслөрәк тәьҫир итә икән. Тик бешкән сөгөлдөр, ҡайнатылған сөгөлдөр һуты был сифатын юғалта. Сөгөлдөрҙө дауаланыу өсөн ҡулланғанда уның тамырында алһыу һыҙаттар булмаҫҡа тейеш. Ҡара көрән төҫтәге сөгөлдөрҙөң файҙаһы күберәк.

**Фибромиома, фиброаденома, мастопатия.** Сей сөгөлдөрҙө 2-4 сәғәт ағым һыуҙа тоторға. Шунан тышын әрсемәйенсә, ваҡ ҡырғыс аша үткәреп, һутын һығырға. Төпрәһен түшкә йәки эстең аҫҡы өлөшөнә компресс рәүешендә һалып йоҡларға. Иртәнсәк был компресты һыуыҡҡа алып торорға кәрәк, сөнки тағы ике тапҡыр ҡулланырға мөмкин. Түш һәм эсте йыуырға, икенсе төнгә тағы ла компресс эшләргә. Өсөнсө төндә тирене ял иттерәбеҙ, дүртенсе һәм бишенсе төндә дауаны һөртәбеҙ, алтынсы төн тағы ла туҡтап торабыҙ. Дауаланыу курсы 20 төн, тимәк, егерме тапҡыр сөгөлдөрҙән компресс эшләйбеҙ. Шунан һуң бер ай, ай ярым самаһы туҡтап торғас, тағы ла ҡабатларға кәрәк.

**Гипертония.** Сөгөлдөр һутына шул уҡ миҡдарҙа бал ҡушып болғатырға һәм көнөнә ете тапҡыр берәр ҡалаҡлап эсергә. Эсер алдынан дарыуға тынынды өрөп, ҡул менән ҡалаҡты шар эсенә алган кеүек хәрәкәт яһарға кәрәк, тип кәңәш итәләр.

**Лимфатик биҙ туберкулезы.** Ярты стакан сөгөлдөр һутына бер балғалаҡ бал ҡушып, иртәнсәк ас көйөнсә эсергә.

**Гепатит.** Стакандың өстән бер өлөшө сей сөгөлдөр һутына шул уҡ миҡдарҙа һыу өҫтәп, көнөнә ике тапҡыр ашағандан һуң эсергә.

**Климакс.** Сөгөлдөр һутына тигеҙ нисбәттә бал ҡушып бутарға. Көнөнә 2-3 тапҡыр 1/3 стакан ҡулләмәндә эсергә.

**Өс сатлы нервы невралгияһы.** Ике-өс тамсы сөгөлдөр һутын ҡолаҡҡа тамыҙырға. Ҡырғыс аша үткәрелгән сөгөлдөрҙө марляға урап, ҡолаҡҡа тығырға кәрәк. Әммә уның һуты тамырға тейеш түгел.

Бигерәк тә фитотерапевтар сөгөлдөр һутын ҡулланырға кәңәш итә. Әммә һуңғы ваҡытта уны әҙерләгәндән һуң дүрт сәғәт тирәһенә ҡуйып торорға тәҡдим итә башланылар. Йыш ҡына ауырыуҙар сөгөлдөр һуты килешмәй, күңелдә болғандыра, ҡоҫтора, дөйөм хәлде ауырлаштыра, ике-өс аҙнанан бөтөнләй түҙеп торорлоҡ түгел, тип зарланыуҙарын ишетергә тура килгәне бар. Ысынлап та, яңы ғына эшләнгән сөгөлдөр һутын эсһәң, тамырҙар ныҡ тартыша. Сөнки унда организмға зыянлы матдәләр бар, тик һут бер аҙ торғас ҡына һәйбәтләнә, кәрәкле дарыуға әйләнә. Шулай уҡ, сөгөлдөр һутын әсетке аҙыҡтар, кеүәҫ, газлы эсемлектәр, әсе һуттар менән бергә ҡулланырға ярамай. Яңы ғына эшләнгән кишер һуты менән ҡушып эсеү яҡшы. Бер аҙ йылытылған сөгөлдөр һутын ашарҙан 10-15 минут алда эсергә кәрәк, ашҡаҙан насар эшләһә, һоло ярмаһына ҡушып ашағыҙ.

Сөгөлдөр организмдың кальций үҙләштереүен ауырлаштыра. Шулай уҡ бешеп етмәгән йәки бешкән сөгөлдөрҙө артыҡ кислоталылыҡ арҡаһында тыуған гастрит, шәкәр диабеты, эс киткәндә, бөйөрҙә таш барлыҡҡа килтереүсе һелтеле бәүел булған осраҡта ашарға ярамай. Бәүелдә таш барлыҡҡа килеү һәм башҡа төрлө матдәләр алмашыныуы боҙолған осраҡта сөгөлдөр ярҙамында дауаланыу ҡәтғи тыйыла.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЭКЗЕМА ТУРАҺЫНДА...

## алты уйҙырма

**Күптәр иҫәпләүенсә, тиреләге сабыртмалар - балалар проблемаһы һәм өлкәнәйә барыу менән ул үтәсәк. Был экзема тураһындағы берҙән-бер уйҙырма түгел.**

Ғалимдар был сирҙең килеп сығыуы тураһында күптән бәхәсләшә. Экзема (тимерәү) - ҡабатлана торған нейроаллергодерматоз, ҡысытырып, ҡутырлы йоғошһоҙ тире ауырыуы. Берәүҙәр, экзема - нервылар ҡаҡшауы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә, тип раҫлаһа, икенселәре уны аллергик сирҙәр рәтенә индерә. Дөрөҫлөк уларҙың уртаһында булып сыға. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, экземаның килеп сығыу сәбәбе ҡатнаш характерлы, ә уны барлыҡҡа килтереүгә тышҡы һәм эске факторҙар, мәҫәлән, ашҡаҙан-эсәк, бауыр, бөйөр, һәм, әлбиттә, эндокрин һәм нервы системаһы ауырыуҙары тора. Хәүеф төркөмөндә ҙур нервы көсөргәнеше кисерергә мәжбүр булған 25-40 йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар тора.

**Экземаны ҡояш һәм диңгеҙ яҡшы дауалай**

Был дөрөҫ түгел. Ҡомда ҡыҙынғанда беҙ тирләйбеҙ, ә ультрафиолет тирене киптерә. Был факторҙар ауырыуҙы көсәйтә генә. Ҡояш ремиссия ваҡытында, йәғни ауырыуҙың билдәләре үҙен белдермәй башлаған саҡта ғына файҙалы. Диңгеҙ тураһында ла шуны уҡ әйтергә мөмкин: ҡайһы бер осраҡтарҙа экзема тап диңгеҙҙә ял иткән саҡта көсәйә.

**Һыу ҡуҙғыуҙы көсәйтә**

Дөрөҫ. Ауырыу ҡиҫкенләшкән саҡта тиренең ҡуҙғыған өлөшөнә һыу тейҙермәү яҡшыраҡ. Әгәр ҙә был мөмкин булмаһа, эсе һыу менән түгел, ә йылы һыу менән генә йыуыныгыҙ. Балалар өсөн тәғәйенләнгән йыуыныу саралары ҡулланығыҙ. Душтан һуң тиренең зарарланған өлөштәрен таҫтамал менән иплә кенә ҡоротоғоҙ, махсус крем һөртөгөҙ.

**Тире ҡуҙғыған саҡта уға майлы крем һөртөп, бәйләргә кәрәк**

Дөрөҫ түгел. Косметик кремдар ҡулланырға ярамай, улар ярағa инфекция индереүе ихтимал. Дерматологияла шундай ҡағиҙә бар: еүеш сабырмалар - еүеш, ҡоролары ҡоро саралар менән дауалана. Һыулы тимерәү ваҡытында юғары һыулы составлы кремдар һәм эмульсиялар ярҙам итә. Ҡоро тимерәүҙе маздар менән дауалайҙар.

**Экзема витаминдар дефицитынан барлыҡҡа килә**

Был турала аныҡ мәғлүмәттәр юҡ. В төркөмө витаминдары көслө аллерген иҫәпләнә. Экзема ваҡытында С витамины ғына файҙалы, сөнки ул кортикостероид гормондары синтезы өсөн материал булып тора. Тап улар экземаға ҡаршы майҙар һәм кремдар составына инә.

**Экземаны дауаларға кәрәкмәй, ул үҙе үтә**

Дөрөҫ түгел. Дауалауһыҙ экзема үтмәйәсәк. Ни тиклем тиҙерәк дерматологҡа мөрәжәғәт итһәгеҙ, шул тиклем яҡшыраҡ.

**Был проблема мәлендә мотлаҡ диета кәрәк**

Ысынлап та шулай. Иң тәүҙә цитрустарҙан, тоҙло, ыҫланған ризыҡтарҙан, шоколадтан, татлы ризыҡтарҙан, консерваларҙан, тәм көсәйтеүселәрҙән баш тартырға кәрәк. Бынан тыш, йорт эштәрен мотлаҡ резина бирсәткәләрҙә башҡарыу тирене химик ҡуҙғытҡыстарҙан һаҡлай. Стресс осраҡтары ауырыуҙы көсәйтә генә.

**Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ақшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (3) дүшәмбе | 5:02 | 6:32 | 13:30 | 18:25 | 19:55 | 21:25 |
| 6(4) шишәмбе | 5:04 | 6:34 | 13:30 | 18:23 | 19:53 | 21:23 |
| 7 (5) шаршамбы | 5:06 | 6:36 | 13:30 | 18:20 | 19:50 | 21:20 |
| 8 (6) кесе йома | 5:08 | 6:38 | 13:30 | 18:18 | 19:48 | 21:18 |
| 9 (7) йома | 5:10 | 6:40 | 13:30 | 18:15 | 19:45 | 21:15 |
| 10 (8) шәмбе | 5:11 | 6:41 | 13:30 | 18:13 | 19:43 | 21:13 |
| 11 (8) йәкшәмбе | 5:13 | 6:43 | 13:30 | 18:10 | 19:40 | 21:10 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*



Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан четвертого созыва ПИСЬМАН-КУЗНЕЦОВОЙ ИНГЕ МИХАЙЛОВНЕ согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006г. №380-з "О выборах".

ИҒЛАН

"Киске Өфө" гәзите редакцияһына Өфөнө һәм республиканы яҡшы белгән **тәжрибәле водитель** талап ителә. **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса шылтыратырға.

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**"Киске Өфө" гәзитенең "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына ҡушылған уҡыусыларыбыҙҙың тәҡдимдәрен һәр һанда күрһәтә киләбеҙ. Бөтәһе лә уҡырға тейешле китаптар исемлеге яйлап үҫә бара. Әлегә ул бына ниндәй:**

**1. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосы**
**2. М. Аҡмулланың шиғырҙар йыйынтығы**
**3. Ҡол Ғәли "Йософ ҡиссаһы"**
**4. Ризаитдин Фәхретдин "Нәсихәттәр"**
**5. Ғайса Хөсәйенов "Тормош" һәм "Донъя" парсалар китаптары**
**6. Шәйехзада Бабич, "Ғазазил" поэмаһы, шиғырҙар.**
**7. Зәйнәб Биишева "Кәмһетелгәндәр" трилогияһы**
**8. Һәҙиә Дәүләтшина "Айбикә" повесы**
**9. Әхмәтзәки Вәлиди "Хәтирәләр"**
**10. Һәҙиә Дәүләтшина "Ырғыҙ" романы**
**11. Мостай Кәрим "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесы һәм поэзияһы.**

**Өфө ҡалаһынан уҡытыусы Тәнзилә Бикбаева беҙҙең яйлап үҫә барған исемлеккә Мәжит Ғафуриҙың "Фәҡирлектә үткән тереклек" хикәйәһен, "Шағирҙың алтын приискыһында" повесын һәм Ғәйнан Хәйриҙең "Боролош" романын индерергә тәҡдим итә.**

- Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың һәр быуын кешеһе уҡырлыҡ тәрән мәғәнә һалынған шиғырҙары бик күп, әммә мин уның шулай уҡ бер ҡасан да әһәмиәте юғалмаҫлыҡ "Фәҡирлектә үткән тереклек" хикәйәһен һәм "Шағирҙың алтын приискыһында" повесы менән танышырға тәҡдим итәм. Тәүге әҫәрендә автор революцияға тиклемге осорҙа ауылда йәшәгән башҡорт ғаиләһенең көнкүрешен һүрәтләй. Ғаилә башлығы ни тиклем тырышып эшләһә лә мандып китә алмай. Был әҫәрҙән бөгөнгө көн менән сағыштырып та бик күп параллелдәр үткәрергә була. Шундай тормошто күреп үҫмәгән йәштәр өсөн дә, юҡсыллыҡтан үҙ көсө менән арынып, етешеп киткән оло быуын кешеләренә лә фәһемле, ҡыҙыҡлы буласаҡ, тип иҫәпләйем. Ә бына "Шағирҙың алтын приискыһында" повесын мотлаҡ йәштәр уҡырға тейеш. Был автобиографик әҫәр булыуы менән дә әһәмиәтле, хеҙмәт тәрбиәһенең мөһимлеген сағылдырыуы ла иғтибарға лайыҡ. Мәжит Ғафури был повесында һәр кемдең үҙ көсө менән мал табып йәшәүен, тормош ауырлыҡтары алдында бөгөлмәйенсә тырышып донъя көтөүен күрһәтә. Прииск эшселәренә тейешле шарттар юҡ, ауыр хеҙмәте өсөн аҡсаһы ла самалы, күптәре зәғиф, һаулыҡтары ҡаҡшаған, әммә улар "алма беш - ауыҙыма төш" тип көтөп ятмай. Унда йәйге каникул осоронда эшкә ялланған төп геройҙар - шәкерттәр ҙә өҫ-башына кейем, уҡыу кәрәк-яраҡтары алырлыҡ хеҙмәт хаҡы артынан барған. Йәштәр ошо китаптарҙы уҡығанда бөгөнгө көн менән сағыштырып, үҙенә фәһем алһын, уйланһын ине.

Башҡа милләт кешеһе менән башҡорт әҙәбиәте тураһында аралашырға тура килһә, тәүге башҡорт романын кем һәм ҡасан яҙған, тигән һорауға бөтәһе лә яуап белергә тейеш. Шуға ла мин "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһының исемлегенә Ғәйнан Хәйриҙең "Боролош" романын индерергә тәҡдим итәм. Был роман 1910-1920 йылдарҙағы башҡорт йәмғиәтен тасуирлай. Әҫәрҙә ошо осорҙағы йәштәрҙең тормошо, уй-фекерҙәре сағылыш таба. Ләкин бында тасуирланған барлыҡ нәмә бөгөнгө тормошобоҙға ауаздаш һымаҡ. Репрессияға эләккән яҙыусының романы бары 1967 йылда ғына баҫылып сыға. Тәү ҡарамаҡҡа аңлайышһыҙ, уҡыуға ауыр тойолған "Боролош" романын яйлап һәм уйлап уҡырға кәрәк. Әҫәрҙең атамаһы уҡ үҙгәрештәр замани тураһында яҙылыуын сағылдыра. Тарих ҡабатлана, беҙ ҙә бындай үҙгәрештәрҙе күрҙек. Ошондай һынылышлы мәлдәрҙә үҙ юлын табыу тураһында уйланған йәштәр романдан оло фәһем алыр: яңылыҡҡа ынтылған геройҙарҙың аң кимәле үҫешеп, ябай халыҡҡа ла ошо белемдәрен еткерергә һәм йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙе аңлатырға тырыша. Һәр замандың аңлы, белемле, донъялағы үҙгәрештәрҙе төшөнгән йәштәре бар һәм улар халыҡты үҙ артынан әйҙәргә, яңылыҡтарҙы массаларға алып еткерергә тейеш.

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# "МИРАҪ"ТАР ЕВРОПАНЫ ЯУЛАЙ



**Баш ҡаланың "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле Бөйөк Британияла үткән Халыҡ-ара фольклор фестивалендә уңышлы сығыш яһап ҡайтты. Улар - бындай киң масштаблы сарала Рәсәйҙән ҡатнашҡан берҙән-бер коллектив.**

"Мираҫ"тарҙың беренсе сығышы Биллингем ҡалаһының иң билдәле концерт майҙанында - асыҡ фестиваль аренаһында үтә. Программаны Өфө тураһында фильм аса. Был көндә тамашаны 10 мең кеше ҡарай. Бынан тыш, ансамбль фестивалдең башҡа майҙандарында ла сығыш яһай һәм Европа тамашасыһына үҙенең иң яҡшы номерҙарын күрһәтә. Бер генә сығыш та, бигерәк тә ҡурай моңо, бер кемде лә битараф ҡалдырмай.

Башҡа коллективтарҙан "Мираҫ" үҙенә генә хас үҙенсәлеге, эҙмә-эҙлеклелеге, сағыу номерҙары, яҡшы хореографияһы, милли кейемдәрҙең этнографик ысынбарлығы менән айырылып тора. Сәнғәт һөйөүселәр милли колорит, Башҡортостандың матурлығын һәм байлығын сағылдырған номерҙар менән ҡыҙыҡһынып, ихлас таныша. Концерт программаһы менән сығыш яһауҙан тыш, ансамбль артистары "Һабантуй" күренештәре менән таныштыра, теләүселәргә бейеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойоштора.

Биллингем ҡалаһы мэры Кен Диксон менән осрашыу ҙа йылы шарттарҙа үтә. Осрашыу барышында Башҡортостандың социаль-иҡтисади үҫеше, 2020 йылда Өфөлә Бөтә донъя фольклориадаһын үткәреү буйынса һөйләшеүҙәр алып барыла. Мэрға милли уйын ҡоралы ҡурайҙы күҙ алдында эшләп, уйнап та күрһәтәләр. Фестивалдең төп мәле булып "Бейеү донъяны берләштерә" тип аталған скульптураны асыу торһа, был хоҡуҡ "Мираҫ" ансамбленә бирелә.

Өфөләрҙең сығышы проекттың ойоштороусылары - фестиваль директоры Джо Малоуниҙың иң юғары баһаһына лайыҡ була. Ул коллективты Чилиҙа үтәсәк фестивалгә лә саҡыра. Шулай уҡ "Мираҫ"тар фестивалде ойоштороусыларҙан, тамашасыларҙан, коллегаларынан да рәхмәт һәм һоҡланыу һүҙҙәре генә ишетә. 1992 йылда ойошторолоп, бөгөн бик күп конкурстар һәм фестивалдәр лауреаты булған коллектив ысын мәғәнәһендә баш ҡаланың визит карточкаһы булып тора.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НАҘАН - ДӘРӘЖӘГӘ,

## ғалим камиллыҡҡа ынтыла

Ялҡау әйткән: "Бөгөн ял итәйем дә, иртәгә тырышып эшләрмен". Егәрле әйткән: "Бөгөн тырышып эшләйем дә иртәгә ял итермен".

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙенең ахмаҡ икәнен белгән ахмаҡ - ысын дәрәжәһендә аҡыл эйәһе, ә инде үҙен иң аҡыллыһы тип уйлаған кеше - иң ахмағы.

**(Будда).**

Хәҡиҡәткә ғашиҡ кешегә шағир булырға ла, бөйөк булырға ла тырышырға кәрәкмәй. Ул ысын мәғәнәһендә шағир һәм бөйөк.

**(Жюль Ренар).**

Йөрәктең йыйырсыҡтары булмай, ул яра йөйҙәренән тора.

**(Колетт).**

Бер алйот ҡағиҙәләр уйлап таба, икенсе алйот шуға эйәрә...

**(Мексика халыҡ әкиәте).**

Башҡалар бәхете тураһында ҡайғыртһаң, үҙ бәхетеңде табырһың.

**(Платон).**

Үҙ өйөндә бәхетлеләр генә тормошта бәхетле.

**(Лев Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хеҙмәтсе көйәнтәһенә ике күнәген элеп, остазына һыу ташый. Бер күнәге ярыҡ була һәм ҡоҙоҡтан ҡайтып еткәнсе, ундағы һыу яртылаш ҡына тороп ҡала. Был хәл ике йыл буйы дауам итә: хеҙмәтсе остазының өйөнә көн дә күнәк ярым һыу килтерә. Ә ярыҡ күнәк үҙенең был хәленә һәм шуның менән хужаһын оятҡа ҡалдырыуына шул тиклем борсола. Берҙән-бер көндө ул хужаһына былай ти:**

**- Миңә оят һәм мин һинең алдыңда ғәфү үтенергә теләйем. Ике йыл буйы мин һинең остазың өйөнә яртылаш ҡына һыу алып килдем, ҡалғаны юл буйы түгелә килде. Минең етешһеҙлегем арҡаһында һин һалған көсөңдән тулы һөҙөмтә ала алманың...**

**Хеҙмәтсе ярыҡ күнәкте йыуатырға теләп, былай ти:**

**- Остазымдың өйөнә илткән, беҙ һыуҙан ҡайтҡан һуҡмаҡты ҡара әле - унда ҡалай матур сәскәләр үҫә. Һин шәйләнеңме, сәскәләр бит көйәнтәнең уң яғынан, тап һин эленеп торған яҡтан ғына үҫкән. Мин һинең етешһеҙлегең тураһында һәр саҡ белдем һәм унан файҙа алырға тырыштым. Тап көйәнтәгә һин эленеп торған яҡтан юлға сәскә орлоҡтары сәстем, ә һин уларҙы көн дә һыу менән һуғарҙың. Мин ике йыл буйы ул сәскәләрҙе остазыма бүләк итәм. Һин булмаһаң, был эш мөмкин булмаҫ ине бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 2 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1599/09